# ҺӘНӘК

5

✦ МАЙ ✦ 2009 ✦

**БЫЛ ҺАНДА:**

**МАШИНАЛАР АШЫҒАЛАР**
4-5-се биттәр

**Үтә йомарт БУЛҺАҢ...**
18-се бит



**– Иҡтисади күрсәк арҡаһында икенсеһен ҡыҫҡартырға тура килде...**

– Второго пришлось сократить из-за экономического кризиса...

А. АНДРЕЕВ

О



Вақытында миңә Хәйбулла районының эш һөйөүсән, ҡунаҡсыл, ярҙамсыл, эскерһеҙ халҡы менән оҙон-оҙаҡ йылдар бергә эшләү бәхете тейҙе. Мин ул йылдарҙы хәҙер ҙә һағынып иҫкә алам. Күпте кисерергә тура килде: яҡшыһын да, яманын да. Көлкөлө ваҡиғалар ҙа булғылай ине. Был ваҡиғаларҙың бер нисәһе тураһында яраткан журналым “Һәнәк”тә элек яҙып сыҡҡан инем. Яңыраҡ тағы ла көлкөлө, ҡыҙғаныс та бер ваҡиға иҫкә килеп төштө.

Үткән быуаттың етмешенсе йылдары. Йәйҙең йәмле ваҡыттары. Беҙ “Һаҡмар” колхозының рәйесе Ишбулды Ҡәйепов менән хужалыкта йөрөйбөҙ, эштәр менән танышабыҙ. Фермаларҙа булдыҡ, ашлыҡ баҫыуҙарының торошо, ураҡҡа әҙерлек, мал аҙығын әҙерләү барышы менән ҡыҙыҡһынабыҙ. Колхоз ярайһы ғына ҙур хужалыҡ, йырҙарҙа йырланған йәмле Һаҡмар йылғаһы буйында урынлашҡан.

Хужалыҡта оҙаҡ йөрөнөк, ҡараһаҡ, төш ауып киткән, ҡорһаҡтар ҙа бушап, асыҡтыра башланы. Шул ваҡыт мине оҙатып йөрөүсе Ишбулды Низам улы колхоздың ҡымыҙ эшләгән йылҡысылыҡ фермаһына кереп, тамаҡ ялғап алырға тәҡдим итте. Мин ҡуш ҡуллап риза булдым.

Ферма урман эсендә, тәбиғәттең хозур урынында урынлашҡан.

Хужабикә беҙҙе бик яҡшы ҡаршы алды. Тиҙҙән балаҫ, буй юрғандар түшәлде. Улар өҫтөнә яҫтыҡтар ҙа килеп ятты, балаҫҡа ашъяулыҡ та йәйелде. Көбөләгә баҙлап ултырған ҡымыҙҙы бешкәндән һуң табынға кәстрүл, ижау һәм туҫтаҡтар менән “комсостав” өсөн махсус әҙерләнгән эсемлекте килтерҙеләр.

Беҙ ашап ултырған урындан алыҫ түгел бер күсмә вагон тора ине, унда йылҡы көтөүсе йоҡлай, тинеләр. Ул шул тиклем ҡаты итеп хырылдай, был тауышҡа урман шаулап торғандай.

Йылҡы көтөүсе Мөхәмәт тигән иптәш булып сыҡты. Ул колхозда бик яҡшы эшләнә лә, һирәк-һаяҡ “төшөрөргә” ярата икән. Әле лә “һелтәп” алып, йоҡлап ятҡан сағы булған. Уның хаҡында һөйләшеүҙән шуны белдем. Мөхәмәт колхоздың Вәзәм ауылында йәшәгән, күпләп мал тотҡан, умарталары ла байтаҡ булған.

Көндәрҙең береһендә йорт хужаһы нык ҡына “төшөрөп” ташлаған. Иртән тороуға башы ауырта икән. Уны “төҙәтергә” ҡатыны Сәлимәнән аҡса һорай. Ләкин тегеһе бик ҡаты тора, аҡсам юҡ, ти ҙә ҡуя. Әммә Мөхәмәт яҡшы белә: кистән йорт хужабикәһе Ырымбур урыҫтарына күпмелер бал һатҡан, аҡсаһы бар. Ҡатынынан үтенеп-үтенеп тә аҡса ала алмағас, ире уға нык асыулана ла, урамға сығып, умарталарҙы тибеп йыға. Бына бер ваҡыт умарталарҙан бал ҡорттары гөж килеп, мыжғып сығалар ҙа хужаға ташланалар. Ул бал ҡорттарының һөжүменә сыҙай алмай ишек алдында иҫһеҙ йығыла. Был ваҡытта урамдан, өй янынан үтеп барған өс ҡатын эштең нимәлә икәнен һиҙеп ҡалып, тауыш күтәрәләр: “Уй бынау ҡорттар, хәҙер ағайҙы үлтерәләр бит!” – тип һөрән һалғас, биттәрен яулыҡтары менән ҡаплап, Мөхәмәтте ҡорттар араһынан һөйрәп сығара башлайҙар. Ығы-зығы килгән ҡатындар уның үҙе менән бергә салбарын да тартып төшөрәләр. Шунда бергә трусиғы ла сиселә... Бына бер ваҡыт ҡорттар Мөхәмәттең асыҡ осаһына ташланалар. Уны йәҙләп ҡорт саға. Мөхәмәт тамам хәлдән тая. Уны тиҙ генә машинаға һалып, Аҡъяр дауаханаһына оҙатырға мәжбүр булалар. Дауаханала уны саҡ үлемдән ҡотҡарып алып ҡалалар...

Бына ошо мәрәкәле ваҡиға тураһында миңә колхоз идараһы рәйесе Ишбулды Ҡәйепов һөйләне, ә башҡалар уны хуплап ултырҙылар.

Ошо ваҡиғанан һуң күп ваҡыттар үтте, донъялар үҙгәрҙе, хәҙер “Һаҡмар” тигән колхоз да юҡ инде, халҡы эш эҙләп төрлө урынға таралып бөтөп бара.

Ишетеүемсә, Мөхәмәт тә, уның ҡатыны Сәлимә лә яҡты донъянан киткән. Улар тураһында ҡыҙыҡлы иҫтәлектәре генә ҡалған.

**Ғилман ЯҠУПОВ,**
Социалистик Хеҙмәт
Геройы, һуғыш һәм хеҙмәт
ветераны.




**– Майн либен Гретхен, бөгөн минең хыялым тормошҡа ашты – Мәскәүҙе күрҙем!**

Иҫкермәҫ иҫтәлектәр

# Бер ус бойҙай



**Рәйсә ФӘЙЗУЛЛИНА.**
Ғафури районы.

# Бейә имдек

Бөйөк Ватан һуғышы йылдары... Аралар алыҫлаша барһа ла, шул осорҙа баштан үткәндәр мәңге хәтерҙән сыҡмай.

Атайҙар, ағайҙар илебеҙ азатлығын яҡлап, яу ҡырына киткән. Беҙ, 10 – 12 йәшлек малайҙар-ҡыҙҙар, ас-яланғас, туң бәрәңге, төрлө үлән ашап,ололар менән йәнәш ауыр эштәрҙе башҡарабыҙ. Ағиҙелдә тығылып ятҡан бүрәнәләрҙе таратабыҙ, муйынға биҙрә аҫып, тары сәсәбеҙ, салғы менән иген сабабыҙ, ҡул тирмәнендә иген тартабыҙ.

Ә бер ваҡиға бөгөнгөләй иҫемдә. Бер төрәнле ат һабаны менән ер һөрөп йөрөйөм. Арыпталып төшкө ялға туҡтаныҡ. Тамаҡ ялғар өсөн әлле нимә юҡ инде: бәрәңге лә ҡатыҡ. Шул саҡ бер ҡолон суп та суп килеп инәһен имә башланы. Ә беҙ күҙ ҡыҙып ҡарап торабыҙ. Тиҙҙән ҡолон туйҙы ла йәшел үләнгә ҡояш йылыһына һуҙылып ятты. Беҙҙең түҙемлек ҡалманы – дуҫым менән бейә аҫтына барып баҫтыҡ та уны имә башланыҡ. Ә ул, рәхмәт төшкөрө, хәлебеҙҙе аңлаған кеүек, ҡымшанмай ҙа башын беҙгә бороп, ҡарап тик тора. Ә һөтөнөң тәмлелеге һуң! Эсеп туйғас, беҙ ҙә ял итергә сиҙәмгә ауҙыҡ.

Бейә имгәс ни, ул көндә арығанлыбыҙҙы ла һиҙмәнек.

Яҙ. Бер нисә малай һөрөлгән ерҙе тырматабыҙ. Атты туҡтатып, тырма аҫтына тығылған сүпте таҙартыуы мәшәҡәтле, оҙаҡ эш. Ә мин туҡтап тормай, ололар кеүек, тырманы күтәреп кенә сүптәрҙән ҡотолорға теләйем. Ауыр тимер тырманы ҡалҡытыуым булды, ул ҡулымдан ысҡынып китте лә аяғымдағы ағас табанлы киндер ботинканың башына бер теше инеп тә китте. Дилбегәм ҡулымдан ысҡынды ла артҡа тәгәрәнем, ат мине һөйрәп алып китте. Тыртыр, тием, ҡәһәрең, туҡтарға уйламай ҙа. Ярай әле шул саҡ алдағы иптәшем минең тауышты ишетеп ҡалып, йүгереп барып атымды шаҡарҙы.

Көлкөлө лә, аяныс та хәлдәр булып торҙо. Байрамдарға икеөс кило он, бер нисә бөртөк кәнфит бирәләр ине.

Бына шулай, арымай-талмай эшләп, Бөйөк Еңеүгә беҙ ҙә үҙ өлөшөбеҙҙе индерҙек.

**Әнүәр ТУҠТАМЫШЕВ,**
тыл һәм хеҙмәт ветераны.

# Хәтерһеҙ автомобилдәр

***Автомобилдән күп нәмә юк хәҙер. Йөрөй белгәне лә, арлы-бирле тормоз-фәләндәренә баҫкыларға эшкингәне лә тимер атты ауыҙлыкларға маташа. Машина заман арбаһы шул. Теләгән ереңә һә тигәнсе алып барып еткерә. Тик бына, кайһы бер шоферҙарҙың хәтере хөртәйә торған сире бар. Ни ғәләмәт, кайһылары бер-ике “ярты”ны дөмбәçләгән килеш руль артына ултыра ла күҙенә ак-кара күренмәй саба ғына. Берәүҙәре һаклык кайышын каптырырға онота, икенселәренең махсус сигналдары эшләмәй. Әлбиттә, был сир йәмғәтселекте бик ҙур хәүефкә һала. Эҫе мәлендә имләп, өшкөрөп калмаһаң, әллә ниндәй бәлә-казаларға илтеүен көт тә тор. Шундай изге, сауаплы ниәттән рейдка сығырға тәүәккәлләнек.***

Дауалау сеансын Өфө районының Николаевка ауылынан башланыҡ. Һауа торошо насар, һалҡын, ямғыр яуып тороуға ҡарамаҫтан, машиналар ағымы гөжләп тора.

Иң тәүҙә рулде тегеләй-былай борғолап килгән ханымды тикшереп алырға булдыҡ. У 615 СМ 02 номерлы машинаны туҡтаттыҡ. Тыш яҡтан ҡарағанда бик арыу күренһә лә, бәлки, уны ла берәй нәмә яфалай торғандыр? Сибәр ханым, мөләйем йылмайып, документтарын һондо. Танытмаһынан аңлашылыуынса, Гүзәл Сөләймәнова була. Ҡатын-ҡыҙҙың хәтере ҡыҫҡа, тиһәләр ҙә, Гүзәлдең иҫе теп-теүәл булып сыҡты. Ҡайышын ҡаптырған, документтары теүәл.

– Ярай, юлығыҙ уң булһын, – тип уның менән хушлашабыҙ.

Инде сираттағы “пациент”ты – С 522 КА 02 номерлы ВАЗ - 213110 машинаны туҡтатабыҙ. Уға дөрөҫ диагноз ҡуйыу өсөн әллә ни аҡыл кәрәкмәй. Һаҡлыҡ ҡайышын әләктермәгән. Танышабыҙ. Баш ҡаланың Дим биҫтәһендә йәшәүсе Фәнис Латипов икән. Үҙе былай тәү ҡарауға бер ҙә сирлегә оҡшаған кеүек түгел, йылмая, көлә, шаяртып та ала. Тик бына әлеге лә баяғы иҫһеҙлек инде. Уға был сирҙән арыныу өсөн инспектор 500 һумлыҡ рецепт яҙып бирҙе. Уның артынан Р 768 УУ номерлы тағы бер машина күренде. Таныҡлығына күҙ йүгертәбеҙ. Иван Куртиев атлы уҙаман. Уның да диагнозы Фәнистекенә оҡшаш. Уға ла тейешле дауа тәҡдим ителде. Файҙаһы ғына тейә күрһен.

ДАИ таяғы әллә ҡайҙан гөжләтеп килгән иномарка алдына һуҙылды. Кабинанан күҙе-башы уйнап торған ҡарағусҡыл йөҙлө утыҙ йәштәрҙәге ир-егет башы күренде. Танышабыҙ. Ҡояшлы Әрмәнстан ҡунағы Ашот Акопян булып сыҡты. Шығырлап торған ап-аҡ ҡышлы Уралды яратыуҙанмы, әллә республикабыҙ иҡтисадын тергеҙеүҙә ярҙам ҡулы һуҙыу ниәтенәнме, уныһы беҙгә мәғлүм түгел, ул бынан тиҫтә йыл элек Башҡортостанға килеп төпләнә. Әле Йоматау ҡасабаһында йәшәй. Күптән түгел Рәсәй гражданлығы ла алған.

Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, Ашоттың да иҫе мүкләнә башлаған, ахырыһы. Шулай булмаһа, праваһы ла булмаған килеш, башына тай типкән әҙәм кеүек, сит кеше машинаһына ултырып сапмаҫ ине.

– Һеҙ законды боҙғанһығыҙ! Быһың өсөн яза ҡаралған. Рәхим итеп, машинағыҙҙы “штрафстоянка”ға алып барып ҡуйығыҙ, ә үҙегеҙгә йәйәү тәпәйләргә тура килер. Шул арала, бәлки, хәтерегеҙ һәйбәтләнә төшөр. – Инспекторҙың шулай тиеүе булды, Ашоттың күҙҙәре май ашаған бесәйҙеке кеүек ялтырай башланы, ауыҙы тағы йырылды. Был тиклем дә ихлас кеше булыр икән...

– Улай уҡ өҙә һуҡмағыҙ әле, дарагуй. Беҙ бит әле егеттәр. Әйҙәгеҙ, нормальный һөйләшәйек. Башҡаса хәтерем насарланмаҫ, аҫһалар ҙа праваһыҙ машинаға яҡын да барамым юҡ, быһа һүҙ бирәм, зинһар, кисерегеҙ ... – тип ялбара башланы. – Теле-телгә йоҡмаҫ алсаҡ егет алан-йолан ҡаранып, үтенеүен дауам итте: – Брат, беләһегеҙме, мин кафела эшләйем. Әйҙәгеҙ, үҙегеҙҙе эсегеҙ күпкәнсе бер һыйлайым. Беҙҙең әрмән халҡы бик ҡунаҡсыл ул...

Ҡара әле, егетте иҫһеҙ тиһәк тә, хәле бөтөнләй үк мөшкөл түгел икән дә. Ана, ҡойроғонан әләктергәс, хәтере күҙ менән ҡаш араһында яҡшырҙы ла ҡуйҙы. Нисегерәк һөйләшә! Ләкин тәртип һаҡсылары уның шыма теленә йомшарманы. Уларға тамаҡ түгел, юлдағыларҙың именлеге ҡәҙерле шул.

Хәҙер машинаһына тота килеп әллә кемде ултыртып ебәргән хәтерһеҙ хужаның үҙенә лә бер аҙ дауаланып алырға тура килер – 2 мең 500 һум аҡсаһын сығарып һаласаҡ. Бынан һуң, моғайын, хәтере кире ҡайтыр.

ВАЗ-21154 маркалы Т 849 ЕТ 02 номерлы автомобилде лә энә күҙәүенән үткәрәбеҙ. Уны егерме йәштәрҙәге Рәнис Ғәниев йүгәнләгән. Өфө егете. Имән кеүек таҙа, йәп-йәш кенә

булһа ла, уның да хәтере хөртәмешләнә башлаған – страховкалау полисын онотҡан. Уны ла бер аҙ имләгәндән һуң:

– Шифаһы мотлаҡ килешергә тейеш, – тип ҡулына 100 һум штраф түләү тураһында квитанция тотторҙолар.

Бер аҙҙан һары уттары менән эңер ҡараңғылығын ярып килеүсе Р 583 ЕВ 02 номерлы “Жигули” пәйҙә булды. Эсе тулы кеше, тәҙрә өлгеләре лә тейәп алғандар. Уны күрмәмешкә һалышыу оло гонаһ булыр ине тип туҡтаттыҡ. Бәлки, әллә ҡайҙан беҙҙең ярҙамға өмөтләнеп килә торғандыр.

– Рәшит Фазлыев булам, – тип таныштырҙы машина йөрөтөүсе үҙе менән.

– Документтарығыҙ?

Апаруҡ йәштәге ир кеҫәләрен ҡапшай башланы, унан пыр туҙып бардачогын соҡорға тотондо.

– Ай, әттәгенәһе, бөтә нәмәм өйҙә тороп ҡалған бит, тумбочка өҫтөнә һалып ҡына торғайным. Ҡартлыҡ шатлыҡ түгел, тип белеп әйткәндәр.

– Һеҙгә нисә йәш һуң?

– Ике йылдан етмешем тула.

Рәшит ағайҙан ул-был еҫ тойолмай. Шуға ла хәленә инеп, өлкән кеше бит инде, документтарын алып килеү өсөн форсат бирелде. Ҡустыһы такси тотоп, йортона сапты. Сәғәт ярым ваҡыт үтеүгә ул кире килеп тә етте. Бөтә документтар теүәл. Рәшит ағайҙы ла бер аҙ дауалап, хәйерле юл теләп оҙаттыҡ.

Инде төн уртаһы яҡынлашыуға ҡарамаҫтан, Кушнаренко ауылына юлландыҡ. Бәлки, унда ла хәтерҙәре хөртәйеп киткәндәр беҙҙе юҡһына торғандарҙыр. Апаруҡ автомобилдәр тикшерелде, ҡайһыларына иҫкәрмә яһалды, икенселәренә фәһемле кәңәштәр бирелде.

Инде сәғәт уҡтары төнгө берҙе һуҡты. Беҙҙең эш сәғәте лә тамам. Ошо арала “сирле” автомашиналарҙы өшкөрөп, имләп, ҡайтыр юлға сығабыҙ. Барыһына ла серле таяғыбыҙҙың шифаһы тейә күрһен.

**Рейдта ҡатнаштылар:**

*Марат НИЗАМОВ, БР буйынса РФ Эске эштәр министрлығы ҡарамағындағы Дәүләт юл хәрәкәте хәүефһеҙлегенең юл-патруль хеҙмәте полкының юрисконсульты, милиция өлкән лейтенанты; Илдар ЙОСОПОВ, БР буйынса Эске эштәр министрлығы ҡарамағындағы Дәүләт юл хәрәкәте хәүефһеҙлегенең юл-патруль хеҙмәте полкының пропаганда бүлеге инспекторы, милиция лейтенанты.*

**Венер ИСХАҠОВ,** Һәнәктең махсус хәбәрсеһе.




# Аҡыл һандығынан

✦ *Бүрене аяғы туйҙыра, ә ГИБДД инспекторын – таяғы.*

✦ *“Тиҙ ярҙам” машинаһы һуңлап килһә, катафалкаға әйләнә.*

✦ *Беҙҙең машиналарҙа ғына хәүефһеҙлек мендәре урынына “Алла һаҡлаһын” тигән яҙыу ҡулланыла.*

✦ *Кеҫәһендә аҡсаһы булмаған шофёр машинаһын һағырап йөрөтәр.*

✦ *Әгәр ҙә Калашников автомобиль конструкторы булған булһа, бөтә донъя Рәсәй машиналарында ғына йөрөр ине.*

**Х. АЙТУҒАНОВ.**



# Туйындырыусы

– Был һүрәттәге бинаны нимә тип уйлайһығыҙ?

– Һарай!

– Ташландыҡ йорт!

– Юҡ, юҡ, дөрөҫ түгел, моғайын, үлһәгеҙ ҙә белә алмаҫһығыҙ, юҡҡа хитланып тормағыҙ ҙа, үҙем әйтәм дә ҡуям: Озёрный ауылындағы икмәкхана ул. Ҡасандыр ул ауыл халҡын ашап туйғыһыҙ ҡаластар менән һыйлаған. Апаруҡ ваҡыттан бирле бында боҫрап торған икмәктәр бешерелмәһә лә, әле лә халыҡты туйҙырыуын дауам итә. Ә халыҡ рәхәтлектән маз килә. Икмәкте һатып алырға тура килһә, хәҙер расхутланып, юҡҡа ғына аҡса түҙҙыраһы түгел. Кем ҡасан нимә теләй, шуны бара ла ала. Ниңә тейәһең тип, мейене серетеүсе лә юҡ. Бөтә нәмә бушлай, торғаны коммунизм инде. Шулай итеп, икмәкхананың эсендәге кәрәк-яраҡтарҙы төрлө яҡҡа таратып алып бөттөләр. Хәҙер сират тәҙрә өлгөләренә етте.



Был икмәкхана ауыл халҡын нигеҙенә тиклем ҡутарып алып бөткәнсе туйындырыр, ахырыһы.

**В. ҠАРАНОВ.**
Учалы районы.

# Аңлашылмаған шифр



«ГАЗ-СЕРВИС»
АСЫR АКЦИОНЕРРАР ЙТМҒИТТЕ

«Учалыгаз» филиалы

453700,Башkортостан Республикаhы.
Учалы kалаhы. Газовиктар урамы,8
Тел./факс(34791) 6-12-35

E-mail: uch_gaz@bashnet.ru

Р/с 40702810300180000075, к/с 30101810600000000754, в Уча
«УралСиб», БИК 04873754, ОКОНХ 90214, ИНН 027803098

Исх. № 177 от 31 марта 2009г

*Төртһәң – күҙ, тигәндәй, учалыларға ни булған, уҙҙәренән-уҙе «Һәнәк» йәбенә килеп эләгергә генә торалар. Әллә шаяртыуҙары шулай инде? Улай тиһәң, етди генә ойошмаға оҡшаған. “Газ-Сервис» асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең “Учалыгаз” филиалын әйтәм дә... Редакцияға уларҙан килгән рәсми хаттың башында беҙ түбәндәге юлдарҙы уҡыныҡ: «АСЫR АКЦИОНЕРРАР ЙТМҒИТТЕ», урынлашкан урыны Газовиктар урамы. Ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ барып ҡарағыҙ!*

**Р. ЫРЫҪҠУЖИНА,**
хаттар бүлеге мөхәррире.

# Телеңә – талҡан!

Бер көндө Учалынан ҡунаҡтар килеп төштө. Күстәнәскә талҡан алып килгәндәр. Эй ҡыуандым, күптән эҙләй инем.

Талҡан – халҡыбыҙҙың милли ашы. Уны борондан алыҫ юлға сыҡҡанда һалып ебәрер булғандар. Ризыҡтың һауыҡтырғыс сифаттары бихисап, асыҡтырмай ҙа, дауалай ҙа, тиҙәр. Шуға күрә талҡанды ҡулыма тотторроуҙары булды, сабырһыҙланып, полиэтилен ҡапсыҡтың тышындағы яҙыуын уҡый ҙа башланым...

Бәй, телеңде йоторлоҡ аҙыҡтың ҡапсығына телеңде һындырырлыҡ һүҙҙәр яҙылған бит: «Милли аҙык», «Байрамгол ауылы», «Ишангол урамы», «Башҡортостандың Урал аръяғында уҫкаән иң якшы сортлы бойҙайҙан етештерелгән тиҙ еҙерләнелеусе аҙык».... Ҡалғанын үҙегеҙ уҡығыҙ, телемдә һындыраһым юҡ инде, мин лут-




сы эсендәгеһен ауыҙ итәйем. Ни өсөн башҡорт телен шул тиклем боҙоуҙарын учалылар үҙҙәре аңлатһын ине.

**Миләүшә ҠОЛМӨХӘМӘТОВА.**

Һәнәк бәйгеһе

**«Һеҙҙә нисек, беҙҙә шулай»**

# Бала ғүмере бер литр...

*Сәләм, Һәнәк туған!*

*Һин әкәмәт хәлдәрҙе үҙ күҙҙәрең менән күргәнең бармы? Булмаһа, Илеш яктарына килеп сык әле, күрмәгәнеңде күрһәтербеҙ.*

*Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙең әкәмәт хәлдәр һиңә ғәләмәт булып тойолоуы бар. Әйтәйек, Үрге Йәркәйҙәге район дауаханаһының бала табыу бүлегендә 2008 йылдың 12 мартында бер туған апайым Р. Ғафарова кыҙ тапты.*

*Ошо ук йылдың июнь айында әлеге лә баяғы бәпәйебеҙ сирләп, ошо ук дауахананың реанимация бүлегенә эләкте. Балаға өҫтәмә кан биргәндәр. Шунан һуң инфекция эләгеп, сабыйҙың хәле тағы ла насарайғас, беҙгә:*



*– Әгәр балағыҙҙы тере калдырырға теләһәгеҙ, бер литр аракы килтерегеҙ, – тинеләр. Килтерҙек. Баш каланан «тиҙ ярҙам» машинаһы сакыртып, беҙҙе шунда оҙаттылар. Сабыйыбыҙҙы республика клиник балалар дауаханаһының реанимация бүлегендә бушлай аякка баҫтырып, терелтеп кайтарҙылар. Уларға рәхмәтебеҙ сикһеҙ. Бына кайҙа эшләй ул ак халатлы фәрештәләр, үҙ эштәренең оҫталары!*

*Үәт шулай, Һәнәк туған, бала ғүмере бер литр ғына тора беҙҙә. Ә бүтән ерҙәрҙә нисек икән?*

**Рәзидә МОРТАЗИНА.**
Иҫәнбай ауылы.








**М. ЛАРИЧЕВ, А. САЙРАНОВ, Р. ЮНЫСОВ һүрәттәре.**



**Файыҡ МӨХӘМӘТЙӘНОВ**

## Иҫерек баш

*Аҡырынып,*
*Һүгенә бер*
*Иҫерек баш,*
*Тамағына*
*Нисек итеп*
*Ултырмай таш!*

## Тар күңелле

*Тар күңелле*
*Ҡыла алмаҫ*
*Яҡшы эштәр.*
*Тамырҙарын*
*Өҙә-өҙә*
*Бик аҙ йәшәр.*

## Һаҙға бата

*Сибәр ҡатын*
*Сибәрләгән*
*Көн-төн һата,*
*Сибәрләген*
*Һатып бөткәс,*
*Яңғыҙ ҡалып,*
*Сыға алмаҫ*
*Һаҙға бата.*

## Булдыҡһыҙ

*Булдыҡһыҙ ир*
*Ғүмер баҡый*
*Ағас атҡа*
*Атланыр.*
*Ағас атҡа*
*Атланыр ҙа,*
*Телен сарлап,*
*Маҡтаныр.*





## Яуыҙлыҡ

*Яуыҙлыҡ ул*
*Алға китеп*
*Барғандарҙың*
*Юлын бүлер.*
*Изгелектәр*
*Ҡылғанды ла*
*Хатта тере*
*Килеш күмер.*

## Киң күңелле

*Киң күңелле*
*Үҙ ерендә*
*Оҙаҡ йәшәр,*
*Үҙ иленә,*
*Үҙ еренә*
*Бәхет өҫтәр.*

# Ожмах ҡартының күргәндәре

Олатайымдың олатаһы Йәнбирҙегә, ожмахта йәшәү ҡағиҙәләрен өлгөлө үтәгәне өсөн, баш фәрештә ике аҙнаға яҡты донъяға ҡайтып килергә рөхсәт итә. Заманында Парижда булған яугирҙең Өфөнөң күп ҡатлы бейек-бейек йорттарына, асфальт йәйелгән юлдарына, ашығып сапҡан машиналарына бик үк иҫе китмәй. Ә бына Өфөнән илле саҡрымда ятҡан тыуып-үҫкән, көн күргән Урта Хәжәт ауылына сәғәт ярымда алып барған электричка бик ныҡ оҡшай. Элек, ул тере саҡта, ат менән Өфөгә барып ҡайтыу оҙон көндә ала торған булған. Тимер юлдың ике яғына ла ултыртылған ағастар ҙа олатайға ғәжәп матур булып күренгән. Юҡһа, элекке шаулап торған ҡайын урманын тимер юл төҙөүселәр тамырынан ҡоротҡайны бит.

Ә бына килеп төшкән Өйҙәрәк тигән туҡталыштан ауылға илтә торған бер саҡрымлыҡ "юл" гүр ғазабынан да хөртәрәк икән. Ултыртылған урман һыҙатының арҡыры киҫеп сыҡҡан өлөшөндә тәрәнлеген бер кем дә үлсәмәгән һаҙлыҡ барлыҡҡа килгән. Сөнки ожмах ҡунағы, иҫкәрмәҫтән, шул һаҙлыҡҡа бата ла ҡуя. Бәхетенә, һаҙлыҡ итектәре кейгән ике егет, юл ҡырында үҫкән сатлы сағанды бөгөп, олатайҙың ҡулына тоттороп, көс-хәл менән тартып сығаралар. Тик уң аяғындағы ожмах ҡатаһы батҡаҡта ҡала. Урман һыҙатын үтеп, һөрөлгән ергә еткәс, аяҡҡа баҫып торорлоҡ булмай башлай, сөнки ныҡ тайғаҡ. Рәхмәт төшкөрө, тағы ла бер резина итек кейгән, ҡулына ҡолға тотҡан изге бер кеше, ҡартатайҙы ҡултыҡлап тигәндәй, ауыл осона тиклем алып барып еткерә. Әммә шатланырға иртәрәк икән, ауыл урамына барып инеүе була, ожмах ҡарты һыу тулған соҡорға бата ла ҡуя. Әлеге изге бәндә тағы ла көс-хәл менән һөйрәп сығара. Был юлы һул ҡатаһы соҡор йотоп ҡуя. Олатайҙың аяғында сигелгән ситектәре генә тороп ҡала. Тубыҡтан батҡаҡҡа бата-бата яҡты донъяла йәшәгән сағындағы ауылына барып етә. Тик бында ла урамдарынан әҙәм үтерлек түгел, бысраҡ һыулы соҡор-саҡыр, тубыҡтан батҡаҡ, аяҡтарҙы һурып алырлыҡ түгел икән. Олатай, хәле бөтөп, кемдеңдер ҡоймаһына килеп һөйәлә лә уйға бата.

Ҡайҙа булған заманында күпереп үҫкән бәпкә үләне, кинәнеп атларлыҡ арба юлы? Урамдарҙы шайтан арбалары менән йырғыслап, аҫтын өҫкә әйләндергәндәр.

Шулай уйланып торғанда, ҡултыҡ аҫтына батҡаҡлы көлүштәрен ҡыҫтырып, кәкре таяҡлы оло йәштәрҙәге бер ҡатын ухылдап ҡартатай янына килеп туҡтай. Былар сәләмләшкәс, һөйләшеп китәләр...

Дүрт йөҙ алтмыш йыллыҡ тарихлы, Өфөнән ни бары – 50, Шишмәнән 15 саҡрымда урынлашҡан боронғо аҫаба башҡорт ауылы Урта Хәжәт халҡы тураһында, уның бөгөнгөһө, киләсәге хаҡында ҡайғыртыусылар күренмәй икән. Колхоз заманындағы мал фермалары, хужалыҡ ҡаралтылары күрше ауылдарға күсерелеп бөткән. Сәсеүлектәр, ер эшкәртеү техникаһы яңы ойошторолған акционерҙар йәмғиәте ҡулына күскән. Халыҡҡа ла эш юҡ икән. Йәштәр ситкә китеп бөтөп баралар. Юлдар төҙөү тураһында һөйләп тораһы ла юҡ.

Емертеп донъя көтәрләк ир-



егет, тәмәке тартыу, эсеү, ялҡаулыҡ, тормошҡа өмөтһеҙ ҡарау сәбәпле, теге донъяға йәшләй китеп кенә торалар икән.

Ауыл ҡырында ғына торған Өйҙөрәк разъезы яҡын-тирәләге ауылдар өсөн үҙенсә бер транспорт үҙәге булған. Йөҙәрләгән пассажирҙар электричканан килеп төшһә лә, уларға ултырырға перрон-фәлән дә юҡ. Әбей-һәбейҙе, ҡарт-ҡороно вагондарға күтәреп мендерәләр, күтәреп төшерәләр, улар бында ғына шундай хөрмәт күрәләр икән. Уларҙың ҡолап төшкән осраҡтарын иҫкә алмағанда...

Шиңгәккүл ауыл хакимиәте етәкселәре үҙҙәре лә ошолай юл йөрөһә, бәлки, был ауыл халҡы тураһында уйлар, сараһын күрерҙәр ине...

Ожмах ҡарты тыуған ауылында оҙаҡ тормаған, мәңгелек донъяһына кире ҡайтҡан. Был тиклем этләнеп башҡа ҡайтып йөрөмәҫтер инде ул.

**Гәбит САДИҠОВ.**




**Әхәт НИҒМӘТУЛЛИН**

## Нимә кәрәк?

**“Бай булыу өсөн ни кәрәк?”–**
**Һорау йәнде уйҙыра.**
**– Аҡыллы баш, – тине остаз, –**
**Байыу шартын тыуҙыра.**

**Эшсе әйтте: – Ер – хазина,**
**Шул ул байлыҡ ятмаһы,**
**Уны файҙалана белһәң,**
**Һин – ил һәм дан батшаһы.**

**Коммерсант ныҡ ҡаршы төштө:**
**– Сауҙа барыһын уҙҙыра.**
**Сауҙа алдында һөнәр, эш**
**Бары туҙан туҙҙыра.**

**– Юҡ-юҡ, – тине, фәхишә ҡыҙ, –**
**Тыуһа яйлы шарттары:**
**Бик матур артҡа ҡыҙыға**
**Замандың ир-аттары...**

**“Бай булыу өсөн ни кәрәк?”–**
**Һорау йәнде уйҙыра.**
**Диуана дәүерҙәр килһә,**
**Байыу шартын тыуҙыра.**

## Яттар эйәләгәнсе

(Шаян йыр)

**Зилә ултыртҡан сейәләр**
**Иртәрәк сейәләнде.**
**Баҡсаға Зилә янына**
**Бер егет эйәләнде.**
**Ҡушымта:**
**Яттар күҙ һалырҙай ҡыҙға**
**Мөхәббәтең бар икән;**
**Сейәләр сейәләнгәнсе,**
**Яттар эйәләгәнсе**
**Юлды алдан яр икән.**



**Был шикле егет Зиләгә**
**Күҙ ата ла, һүҙ ҡата.**
**Унын шулай ҡыланыуы**
**Һарыуымды ҡайната.**
**– Сейәгеҙ затлы! – ти егет, –**
**Ниндәй сорт? – тигән була.**
**Зилә лә ауыҙын йырып:**
**– Чёрт белһен, – тигән була.**

**Таҫма теле менән егет**
**Ҡыҙҙы ҡаратмаҡ була.**
**Минең мөхәббәт шатлығын**
**Урлап таратмаҡ була.**

## Һинең ҡулда

**Ҡабарған саҡтарым булыр,**
**Мине “тау” тип уйлама.**
**Шаулаған саҡтарым булыр,**
**Мине “шоу” тип уйлама.**
**Минең йөрәк һинең ҡулда,**
**Йөрәк менән уйнама.**

## Замансаһы

**Ҡабарған саҡтарым булыр,**
**“Күркә икән” тиә күрмә.**
**Сыр-сыу килгән сағым булыр,**
**“Өркә икән” тиә күрмә.**
**Эҙләгән саҡтарым булыр,**
**Күҙгә күренә күрмә.**
**“Өҙөләм” тигән саҡ булыр,**
**Ялғайым тиә күрмә.**



А. ӘНҮӘРОВ



*Коррупцияға каршы системалы эш итеү дәүләттең стратегик бурысына әүерелә һәм быйыл тейешле республика Законын кабул итергә кәрәк. Был йәһәттән коррупцияға каршы көрәш буйынса бөтә тупланған тәжрибәне файҙаланыу зарур.*

*(Башкортостан Президенты М.Ғ. Рәхимовтың мөрәжәғәтнамәһенән.)*

**Риф МИФТАХОВ**



Хикәйә

Тимерхан теләгәнә иреште: кисә уны һаулыҡ һаҡлау министрлығына ҡараған профессионал ауырыуҙар дауаханаһының психотерапия бүлегенә килтерҙеләр. Дуҫы Әбдрәш: “Главврач менән һөйләштем, килһен, ти. Әйҙә, оҙаҡҡа һуҙмайыҡ, лекциялар, практик дәрестәр иҫ киткес ҡыҙыҡ, ашау шәп ҡуйылған, иң мөһиме файҙаһы ҙур буласаҡ, тәүәккәллә,”– тигәс, бисәһе теше-тырнағы менән ҡаршы килеп ҡараһа ла, башында уянған уйҙан Тимерханды туҡтатыр һүҙ-көс таба алған әҙәм әлегә булғаны юҡ. “Иҫәрҙәр һаны кәмер тип ҡурҡаһыңмы?”– тип бисәһенең мыҫҡыллауы уны бары нығырaҡ сәмләндерҙе.

Бына улар – ике дуҫ – заманса йыһазландырылған, быға тиклем һаулыҡ һаҡлау йорттары ишетмәгән-күрмәгән ҡорамалдар, әллә ниндәй бәйләм-төргәктәр менән тултырылған залда ултыралар. Трибунаға дауахананың урта буйлы баш врачы күтәрелеп:

– Беҙҙең докторҙар, ғалимдар, хәҙер шуны асыҡланылар, – тине, һүҙен ҡыҫҡа тоторға уйлауын һиҙҙереп. – Коррупция, әфәнделәр, бик етди сир, ҡурҡыныс ауырыу. Уның нәмә икәнен беләһегеҙ. Һаман төшөнөп етмәгәндәргә аңлатып китәм. “Коррупция” – латин һүҙе, ул һатып алыу, йәғни, яуаплы етәкселәрҙең аҡсаға, долларға, хатта евроға һатылыуы. Капиталистик илдәрҙә генә булған был күренеш хәҙер беҙҙең йәмғиәтте лә билəп алды. Бына минең эргәлә билдәле ғалим, профессор, коррупция психологияһының ҙур белгесе Кукушкин Тихон Карманович ултыра. Хәҙер микрофонға уны саҡырам. Рәхим итегеҙ.

– Коррупция, взяточничество – улар, ысынлап та, ҡаты сир, кешенең мейеһенә, бөтә организмына ныҡ тәьҫир итә, – тип башланы һүҙен йылмайыулы йөҙөндәге ҙур танауы аҫтынан ике мыйыҡ остарын өҫкә ирененә һәлендереп ҡырған профессор. – Бигерәк тә, мин взятка алыуға нығырaҡ туҡталып китер инем.

Ошо саҡ Тимерхан дуҫына башын бороп, бышылдап ҡына:

– “Взяточничество”ны беҙҙеңсә нисек атайҙар? – тип һорап ҡуйҙы.

– Һүҙлектән ҡараным, ришүәтсе була икән, – тине Әбдрәш шым ғына. Ә белгес һүҙен дауам итте:

– Нормальный кеше, бер нисә тапҡыр взятка алғандан һуң, уның тоҙағына эләгә. Әммә беҙ быны дауалауҙың универсал методтарын, программаһын таптыҡ. Беҙ дауалағандан һуң взяточниктар әсәнән тыуған ваҡыттағы һымаҡ таҙа буласаҡ, унан инде әлеге яраткан эш урынына ҡайтасаҡ.

Ошо саҡ дауахананың баш врачы:

– Әфәнделәр, ултырған бүлмәгеҙҙең тирә-яғын ҡарағыҙ, – тине, урынынан ырғып тороп, – бүлмә бик үҙенсәлекле йыһазландырылған. Әйләнә-тирәгеҙгә ташланған бәйләм-бәйләм пачкалар һеҙҙе һәр саҡ тартып торған, һеҙ көн-төн уйлап йөрөгән байлыҡ – аҡса, доллар, евро-валюталар. Һеҙ тиҙерәк “алыу психозы” менән сирләгән пациенттар. Быларҙы күреү менән уларға ташланырға ғына тораһығыҙ. Был бүлмәгә кергәндә үк мин хәрәкәттәрегеҙҙән, йөҙ-һүҙҙәрегеҙҙән күреп торҙом. Һеҙгә быны беҙ рөхсәт итәсәкбеҙ. Ләкин һеҙ, пачкаларҙы алып һәләт кенә кеҫәләрегеҙгә тултыра башлауығыҙ була, ОМОН кейемдәре, каскалар кейгән медсестралар, санитарҙар ҡапыл килеп инәләр ҙә, спецзаказ менән үрелгән ҡамсылар менән ҡулдарығыҙға һуға башлайҙар. Һуғыу төрләсә: ҙурырaҡ доллар, евро пачкалары эләктерергә тырышыусыларға нығырaҡ эләгәсәк. Эксперимент ике ай барасаҡ. Ул бик уңышлы башланды. Бер айы үтте лә инде. Элекке ғәҙәтен ташламағандар, был айҙа ла дауаланыуын дауам итәсәктәр. – Шул саҡ баш врачты Әбдүштең:

– Ә ниңә үтә әсе тейгән ҡамсы үрҙәрҙегеҙ, өҫтәүенә яланғас ҡулбеләктәргә һыҙҙыртаһығыҙ?! Был бит гуманлы дауаланыу этикетына һыя торған эш түгел. Мин, ныҡ ҡамсы эләккән чиновник булараҡ, быға ҡәтғи рәүештә ҡаршы сығам! – тигән һүҙҙәре бүлдерҙе.

Шул саҡ коррупция психологияһы белгесе тағы телгә килде:

– Мин һеҙҙе аңлайым, тик коррупция вирусы үтә ныҡ тәрән китә, ул мейе ҡатламын юҡҡа сығара. Ә беҙ мейе аша кешенең үҙ поступкаларын уйланҡырап эшләргә өйрәтәбеҙ. Эффект күренә лә башланы. Артабан ул иҫ киткес буласаҡ. Примитив урлашыуҙарға, юҡ-бар взяткаларға быны хатта бер сеансы ла етә. Һеҙҙеке кеүек ҙур масштаблы коррупционерҙарға ҡаршы оҙайлы сеанстар, дауалауҙар, өҫтәмә сығымдар кәрәк. Был йәһәттән хөкүмәт ярҙамы хәҙер бик ҙур.

– Эйе, эйе, – тип элеп алды тағы ла баш врач, – хөкүмәт ярҙамы менән беҙ ошо больницала тағы ла бер кабинет астыҡ. Быныһы үтә лә современный, бик юғарыла ултырған чиновниктарҙы фашлауға ҡоролған. Иң һуңғы стилдә йыһазландырылған уның кабинетын күҙ алдына килтерегеҙ. Нәҡ шундай обстановканы беҙ унда ла булдырғанбыҙ. Әйтәйек, баш врач – мин ҙур чиновник ролен башҡарам, ти. Минең янға взятка бирергә берәй һәйбәт кейенгән бүлек мөдире килде икән, ти. Взятка һалынған папканы ул иплəп кенә минең яҡҡа шыл-

дыра башлай. Быны һиҙгән прибор шул саҡ ультрозвукты ҡабыҙып та ебәрә. Взятка биреүсе лә, алыусы ла – икеһе лә ҡапҡанға эләгәләр, ҡасмаҡ булалар, тик һуң инде...

Был төндә ике дуҫ бик оҙаҡ һөйләшеп яттылар.

– Рәхмәт, дуҫ, – тине Тимерхан, – коррупцияға ҡаршы иҫ киткес бүлек асылған бит бында: һәр кемгә хөрмәт, ашау-эсеү ниндәй! Организованный показательный суд бит был. Ниндәй метод тапҡандар!

– Уныһы шулай, – тине Әбдрәшит, йылмайып, – тик йыш ҡына обратный эффект та бирә.

– Нисек?

– Үтә оҫта алырға өйрәнгән чиновник ришүәтсе үҙе бирә башлай.

– Һәйбәт, хөкүмәткә файҙаһы була.

– Булыр! Әйҙә, тәҙрәнән тышҡа ҡара әле.

Тимерхан, дуҫына эйәреп, ҙур тәҙрә янына килде.

– Ана, ҡарале, больница тирәяғында тик иномаркалар тора. Быны ошо инде побочный эффект һеҙемтәһе. Хәҙер ришүәтсе чиновниктар был больницаға эләгеү өсөн бында эшләгән профессорҙарға, врачтарға, хатта медсестраларға бирәләр. Машиналар ҙа шул взяткаларға һатып алынған. Коррупцияһыҙ мин, һин дауаланған бүлек тә асылмаҫ, дәүләт ҡарарҙары ла үтәлмәҫ ине.

Ҡәнәғәтлектән күңелдәре тулышҡан ике дуҫ шешәлә ҡалған коньяктарын тамамлап ҡуйырға бүлмәләренә атланылар.

# Еңгәм шатлығы

**(Булған хәл)**

**Идара ултырышында мине егерме дүрт кешенән торған төркөм етәксеһе итеп һалам әҙерләргә ебәрергә хәл иттеләр. Йыйылыштан һуң колхозда ветфельдшер булып эшләгән Урал ағайымды илтеп ҡуйҙым. Өйҙәренә ингәйнек, китте бит еңгәм зарланып. Имеш, көнө-төнө дәүләт эше тип, әллә ҡайҙарҙа юғалып йөрөй, кеҙ еткән, ни бесәне етерлек әҙерләнмәгән, ни утыны юҡ, теге лә был. Шул мәл ағайым, миңә күҙен ҡыҫып:**

**– Ярай, купһенмә, Разия, иртәгә үк өйҙән сығып китәм, мине начальник итеп Ҡаҙағстанға һалам төрөргә ебәрәләр. Минһеҙ рәхәтләнеп йәшәрһең, – тимәһенме!**

**– Булмаҫты һөйләп торма, тапҡандар ебәрер кеше, – тигән булды еңгәм.**

**– Эйе, идара ҡарары буйынса, коммунист булараҡ, был яуаплы эш уға йөкмәтелде, – тигән булдым мин дә.**

**Шул ваҡыт еңгәмдең күҙҙәре шарҙай булды:**

**– Харап иткәнһегеҙ икән иремде, ул бит Стәрленән дә ары киткәне юҡ, әрмелә лә булмаған, грамотаһы ла самалы ғына, сит яҡта аҙашып ҡалһын тигәндәрҙер инде, – ти өҙгөләнеп.**

**– Мин хәҙер кире идараға барам, шунда колхоз рәйесе менән ныҡ һөйләшеп ҡарармын, әгәр ҙә берәй арыуыраҡ кандидатура тапһаҡ, бөгөн үк килеп әйтермен, – тигәс, ағайым:**

**– Ҡустым, юҡ менән булышып йөрөмә, китәм тигәс, китәм, исмаһам, бер донъя күреп, йөрөп ҡайтырмын,– тип зыҡ ҡуба. Мин:**

**– Еңгә, һин ауыҙыңды асып торма, иреңде юлға әҙерлә, дүрт-биш тауығыңды һуй, мунса яғып индер, кейемен әҙерлә, – тинем дә “Днепр”ыма ултырып һыпырттым.**

**Тик торғандан еңгәмде ниндәй ҡайғы утына һалғанымды һиҙеп, бер нисә сәғәттән тағы быларҙың ауылына саптым. Килеп ингәс тә:**

**– Еңгә, хафаланма, хужалар менән һөйләштем, ағайым урынына үҙем китәм һалам әҙерләргә, – тигән булдым.**

**Күрһәгеҙ ине шул ваҡыт нисек шатланғанын еңгәмдең. Ошо ҡылған “изгелектәрем” өсөн мине етәкләп тигәндәй өйгә индереп, түрбашҡа ултыртып та ҡуйҙы. Тоҙлап-борослап, һарымһаҡ һөртөп, мунса мейесендә ҡып-ҡыҙыл итеп ҡурылған тауыҡтар эргәһендә сәйе лә, мәйе лә бик мул булды был кистә. Шул ҡәҙәре лә тәмле бешергән тауыҡ итен ҡабат бер ҡасан да ашағаным булманы.**

**Үҙен ҡыуандырғаным өсөн шәп һыйланы еңгәм!**

**Таһир КҮСКИЛДИН.**
Мәләүез районы,
Даниловка ауылы.




**– Хәлеңде белергә ингәйнем, күрше...**
– Зашла тебя навестить, сосед...




**– Ҡара әле, улыбыҙ инглиз телен өйрәнеп алған!**
– Глянь-ка, наш сыночек английский язык выучил!

**Сәрүәр ҒӘЛӘҮЕТДИНОВ**

## *Әҙәпһеҙ тылсым*

**Йылан арбай, яҙмыш юрай,**
**Төп шөғөлө – өшкөрөү:**
**Ары торһон уның янда**
**Рәсәйский Кәшпирәү.**

**Күрәҙәлек ҡылған элек**
**Болгар ҡатыны Ванга.**
**Унан да уҙҙыра Хәсби,**
**Ул бер өлгө заманға.**

**Йәнәһе, түлһеҙ түлләнә,**
**Буйҙаҡты өйләндерә.**
**Саҙаҡаны күп бирһәләр,**
**Телһеҙҙе теlләндерә.**

**Нотой бабай әйтте бер көн:**
**“Һиндә алама ғәҙәт:**
**Тылсымға әйә булалмай,**
**Белмәгән кеше әҙәп!”**

## *Эш харап*

**Әҙһеҙ-ниһеҙ ғәйеп булған,**
**Ҡайҙа алып киткәндәр:**
**Ауыл үгеҙен тапмайҙар –**
**“Айыу майы” һөрткәндәр.**

**Кәртәнән аттар юғала,**
**Кәзә-һарыҡтар – һанһыҙ.**
**Ҡайһы уғры эше икән,**
**Ҡайҙан килгән иманһыҙ?**

**Күрәҙәлек ҡылды Низам,**
**Ниҙер һиҙгәндәй тойоп:**
**Баҡһаң, үгеҙҙе, аттарҙы**
**Алып киткәндәр һуйып...**

**Былай барһа эш харап,**
**Арала икән ҡараҡ.**

## *Буталған*

**Берәү елә “джип”та,**
**Берәү елә ишәктә.**
**Берәү ята коттеджда,**
**Берәү ята түшәктә.**

**Берәү туйып һикерә,**
**Берәү астан кикерә,**
**Берәү кәртkә тән һата,**
**Берәү донъяһын вата.**

**Ни хикмәт был донъяға,**
**Ниңә шулай буталған?**
**Сөнки тормош тотҡаһын**
**Байҙар ҡулына алған.**



# Яугирҙәр тантанаһы



*Ер үҙенең йәшел кулы менән*
*Тағы ла бер яҙҙы күтәрҙе.*
*Ә һандуғас, һантый,*
*тағы, тағы*
*Хыялый баш итә*
*күптәрҙе...*



*Дуҫлык ебе*
*яһалмаған камырҙан,*
*–Ул киләләр бик борондан*
*тамырҙан.*
*Тиңлек булһа,*
*дуҫлык ебе нык була,*
*Тиңлек бөтһә, дуҫлык үҙе*
*юк була.*

**Дим ҒИЗЗӘТУЛЛИН,**
запастағы өлкән сержант.

Беҙ ҡапсыҡта ятмай

# Күп кәрәкмәй

– Мин лётчик булам!

– Минең герой булғым килә.

– Ә мин – сәйәхәтсе! Колумб кеүек берәй материк асам да шуға үҙем исем ҡушам. Вәт шунан даным китер бөтә донъяға таралып. Ҡайҙа ғына барма, кемде генә тыңлама, барыһы ла минең турала ауыҙ тултырып һөйләр, башҡаларға өлгө итеп ҡуйыр...

Бала саҡта танылған кеше булыу тураһында кем генә хыялланмай?

Баҡһаң, билдәле булыу өсөн әллә ниндәй иҫ китерлек эштәр ҡыйратыу кәрәкмәй икән дә. Ҡайһы саҡ һис юҡтан ғына әҙәм балаһы ҙур даһиҙар кеүек шөһрәтле була ла китә. Ана, Өфө егете Артур Максимов һуң! Барыһы ла үҙенән-үҙе, уйламағанда-нитмәгәндә килде лә сыҡты. Әллә ни көс тә һалманы кеүек.

Артур Башҡортостан Республикаһы буйынса Техник инвентаризациялау бюроһында (БТИ) эшләй.

Донъя булғас, хәлдәр гелән ал да гөл генә булып тормай. Ауырып та китәһең, һыҙланып та алаһың. Бер туҡтауһыҙ эшләүҙәнме, берҙән-бер көндө Артурҙың да хәле мөшкөлләнеп, егет 33-сө поликлиникаға юллана.

– Ҡустым, һиңә бер аҙ дауаланып алырға кәрәк булыр. – Егетте ентекләп тикшергән врач Артурға “больничный” аса.

Доктор ҡушҡан дауалар килешеп, теүәл бер ай тигәндә, егет аяҡҡа баҫа.

– Хәҙер ер емертеп эшләй алаһың! – Врач егеттең “больничный”ын яба. – Ярай, иҫән булығыҙ!

“Дарыу бер ереңә файҙа булһа, икенсе ереңә зыян килтерә”, – тип бик дөрөҫ әйткәндәр икән. Бер туҡтауһыҙ укол ҡаҙауҙың, дарыу эсеүҙең ҡасафатылыр инде, егеттең хәтер тигән нәмәһенә әҙ-мәҙ зарар килә бит. Шуның һөҙөмтәһе булып, иртәгәһен Артур эшкә барырға онота ла ҡуя. Уның ҡарауы, ҡояш төшлөккә еткәнсе йоҡо һимертә лә тамаҡ туйҙырып, ҡала буйлап сығып китә. Әммә һуңғараҡ егеттең иҫе кире ҡайта ла ҡото оса. Быны өсөн шаяртмаясаҡтар. Хәҙерге заманда шап итеп арт яғыңа тибергә лә күп һорап тормаҫтар. Берәүҙең эштән осҡанын тиҫтәләгәне күтәп кенә йөрөй. «Әһә, таптым. Шуға ла башы етмәҫкә әллә!» Егет “больничный”ҙағы яҙыуҙы йәһәт кенә үҙгәртә лә ҡуя.



Хәҙер Артурҙың был эше менән хоҡуҡ органдары ҡыҙыҡһына.

Исемең тарихта ҡалһын өсөн даһи булыу кәрәкмәй икән дә.

**Р. АҠБУЛАТОВА,**
**И. ХАҠОВ.**




**– Кибеттә һөт булмаһа, быҙауҙарға нимә бирер инек?..**

– Что дали бы телятушкам, не будь в магазине молока?..

**А. ВАСИЛОВ**

## Халыҡ әйтһә–хаҡ әйтә

*Һәр эш көс талап итә. Әкиәттәге карт та бит, ейәнен, ахыр сиктә улын да ебәреп, диванда ял итеп кенә ятмай, балыҡ ауларға үҙе китә. Еңелерәк тә булыр ине, бер уйлаһаң, улар алып ҡайтҡан балыҡты әбейе баҙарға алып барып һатып, аҡсаһын бабайға ҡайтарып бирһә, онотолмаҫ әкиәт тә тыумаҫ ине. Ә бына Ишембай ҡалаһынан ирле-ҡатынлы А. һәм Г.Ҡыямовтар бабайға ҡарағанда аңлыраҡ булып сыға, аҡса эшләүҙең еңелерәк юлын таба. Улар яҡшы ғына таныштары исеменә 420 мең һумға автокредит алып, уны түләмәйенсә, машинаны алдаҡ юл менән ломбардҡа һалғандар. Ломбардтан алынған 280 мең һумды, үҙ кеҫәләренә йомдорғандар. Бынан тыш, икенсе бер таныштарынан бурысҡа тағы ла ҙур ғына сумма аҡса алғандар...*

*Ни ғәләмәт, теүәл бер йылдан, уларҙың бурыстары бөтөнләй түләнелмәгән булып сыға. Ҡулға төшкән һәр тиндә Ҡыямовтар иркенән мәхрүм ителгән улдарына ярҙам итеү өсөн ҡулланған икән. Ләкин «ярҙам»дың нимәнән ғибәрәтлеген улар сер итеп һаҡлай. Кем белә, бәлки әйтеүе оятлыр, йә иһә «Маңлайы тирләмәгәндең ҡаҙаны бешмәй» тигән мәҡәлде иҫтәренә төшөрөп, хаталарын аңлап, өнһөҙ ҡалғандарҙыр... Ни тиһәң дә, тап килтерелгән мәҡәл тәртһөҙлөгөн таныуҙа ярҙам итмәһә, ул кешеләрҙе дөрөҫ юлға баҫтырыу өсөн ҡулланыла ала... төрөүсән була ул.*

**Р. ХӘСӘНОВА.**

> *“Сауҙа структураһын һаҡлап ҡалыу, ассортимент, хаҡ һәм кредит сәйәсәтен камиллаштырыу мөһим.”*
>
> *(Башҡортостан Президенты М.Ғ. Рәхимовтың мөрәжәғәтнамәһенән.)*

### ✦ Сәйер сауҙа серҙәре

# Магнит тылсымы

Магниттың файҙаһы тураһында сей наҙан кеше лә яҡшы белә. Мәҫәлән, металлургия заводтарында ҙур, ауыр йөктәрҙе күтәреү, күсереп йөрөтөү өсөн электромагнитлы күтәргес крандарҙы файҙаланалар. Ә инде уның ауыл хужалығындағы хеҙмәте тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ. Магнитлы ҡорамалдар ярҙамында культуралы үҫемлек орлоҡтарын сүп үләндәренән айырыу мөмкин. Ә фокусҙарҙың уның менән әллә нимәләр ҡыландырып, тамашасыларҙың күҙен буяуы, төрлө мажаралар күрһәтеп, шапылдатып аҡса һуғып ятыуы ла мәғлүм.

Бәхетһеҙ, магнит ярҙамында серен байырға мөмкин икән. Шуға ла уның менән төрлө тәжрибә үткәреүселәр әленән-әле осрап тора. Ышанмайһығыҙмы? Әнә, Благовещенда йәшәүсе О.Герасеванан һорағыҙ.

Бер саҡ йылғыр ханым үҙе етәкләгән «Магнит» магазинында ғәжәйеп күнекмәләр яһарға тотона. Уның ҡулындағы магнит хатта ҡағыҙ аҡсаны, аҙыҡ-түлекте лә үҙенә сат йәбештерә башлаған, ти. Шул серле нәмәкәй, һис уйламағанда, кешеләрҙе лә үҙенә һөйрәй икән. Был юлы ул Ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау һәм кеше именлеге өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы хеҙмәткәрҙәрен тартып алған, ти. Тикшереүселәр был күренешкә аҫҡан ауыҙҙарын да ябырға онотоп, был ни ғилдә, тип ҡарап торғандар, имеш. Магазиндағы «Фантазия», «Витаминный» салаттары, инде күптән срогы үтһә лә, әле һаман витринанан айырыла алмай тороуын күргәс кенә Герасева ханымдың тәжрибәһе, ғәләмәт елле булыуын аңлағандар. Тикшереүселәр ҙә баҙап ҡалмаған, тилбер ханымдың ғәжәйеп тамашаһы өсөн үҙенә биш мең һум штраф сәпәгәндәр.




**В. ҒАФУРОВ.**







А. ВАСИЛОВ



**– Ашарға етмәгәс, квартиранттар индерергә тура килде.**
– На еду не хватает, пришлось пустить квартирантов.

О Атайҙар ғүмере... Атайҙар даны...

Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллыҡ юбилейына әҙерләнгән көндәрҙә был һүҙҙәрҙе ғорурлыҡ менән әйтәбеҙ. Шулай булмай, атайҙарыбыҙ иңенә заман йөгөнөң иң ауыр өлөшө төшкән бит.

Мин атайымдың ғүмер миҙгелдәрен тулҡынланып иҫкә алам. Үткән быуаттың егерменсе йылдарында ул – тыуған ауылы Сәйеттә тәүге комсомолдарҙың береһе. Утыҙынсы йылдарҙа – яңы ғына ойошторолған колхоз ағзаһы. Ҡырҡынсы йылдарҙа – фашист илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштең алғы һыҙығында. Утыҙынсы йылдарҙан алып район һәм республика матбуғатында әүҙем ҡатнашҡан ауыл хәбәрсеһе ине. Шиғырҙар ҙа яҙғылаңы. Гармунда уйнап, йырларға ла ярата торғайны...

Совет Армияһы сафтарында хеҙмәт иткәндә мин атайымдың һуғыш иҫтәлектәрен йыш хәтерләнем. Бер мәл беҙҙең часты тревога менән күтәрҙеләр. Туғандаш ил (ул ваҡытта ысынлап та шулай ине) ғәскәрҙәре менән бергә үткәрелгән учениеға сыҡтыҡ. Беҙ, үҙебеҙҙә булған бөтә хәрби техниканы һәм ҡоралды алып, маршҡа ҡуҙғалдыҡ. Учение шарты буйынса билдәләнгән операцияны уңышлы башҡарып, беҙҙең часть тәүлек эсендә йөҙҙәрсә саҡрым юл үтте.

Төн. Алдыбыҙҙа ҙур йылға. Ай яҡтыһында ялтырап ятҡан һыуҙы күргәс, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында атайымдың нисек Днепр аша сығыуын күҙ алдыма килтерҙем. Ут ямғыры аҫтында беренселәрҙән булып кисергә тура килгән уларға Днепрҙы. "Бүрәнәләрҙе ҡайыштар менән бәйләп, һал яһап йөҙҙөк",– тип йыш ҡына хәтергә ала ине ул. Ә беҙ ҡеүәтле "Урал" автомобилендә йылға аша йырлап ҡына сығып киттек. Сөнки пантон күперҙәр төҙәү подразделениеһы һанаулы минут эсендә бына тигән күпер һалып ҡуйғайны.

Һуғыштан һуң армияның техник ҡеүәте һәм хәрби мөмкинлектәре ныҡ үҙгәрҙе, әлбиттә. Өр-яңы техника, ҡоралдар барлыҡҡа килде. Атайым уларҙың

# Атайҙар ҡайттылар һуғыштан...



күбеһен күҙ алдына ла килтерә алмағандыр, моғайын. Хәйер, был ғәжәп тә түгел. Сөнки улар беҙҙең көүек һуғыш уйындарында уйнап ҡына еңеүселәр түгел, ә ысын һуғыштарҙа ҡатнашып, ысын дошмандарҙы ҡыйратыусы ысын батырҙар!

Нисек кенә ауыр булһа ла, атайымдар аяуһыҙ алыштарҙа һынатмаған. Днепрҙы ла уңышлы кисеп, һөжүмгә күскәндәр һәм еңеү яулағандар. Был алышта атайым старшина Шәйнур Сәлимгәрәев "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән...

Беҙ һанаулы минуттар эсендә йылғаны кисеп, "һөжүм"гә күстек. Часыбыҙҙың хәрби әҙерлеге командование тарафынан юғары баһаланды. Беҙ ҙә ҡыйыулыҡ буйынса атайҙарҙан ҡалышманыҡ, йәнәһе!

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, атайым илбаҫарҙарҙы ҡыуып, был ерҙәргә килеп етә алмаған. Яраланып ҡалған... Һуғыштан ул инвалид булып ҡайтты. Юҡ, юҡ, атай үҙен ғәрип тә, имгәк тә итеп һанаманы. Туғыҙынсы тиҫтәне ваҡлағанда ла унда йәшәү дәрте, тормош ялҡыны һүрелмәне. Ә бер мәл ул миңә ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған ҡағыҙ күрһәтте.

– Ҡара әле, улым, – тине тартынып ҡына, – Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға бағышлап яҙғайным...

Ҡараһам – шиғыр! "Фронтовик" тип атаған уны атайым.

*Еребеҙгә дошман баҫып ингәс,*
*Ил һаҡларға*
*сығып киттең һин.*
*Бөркөт кеүек*
*ҡыйыу һалдат булдың –*
*Илгә тоғро*
*хеҙмәт иттең һин.*

*Һәр ваҡытта*
*алғы сафта булдың,*
*Уттар-һыуҙар аша*
*үттең һин.*
*Фашистарҙы*
*тукмап өңдәрендә,*
*Берлинғаса барып еттең һин.*

*Ҡулдарыңа тотҡан*
*мылтығыңды*
*Дошмандарға тура төҙәнең...*
*Әсе һуғыштарҙың даны булып,*
*Күкрәгеңдә миҙал биҙәне.*

Был шиғырҙы уҡығас, атайым кеүек бөтә ветерандарҙы ла ҡосаҡлап алғым, уларҙың һәр береһенең ҡулын ҡыҫып, рәхмәттәремде еткергем килде. Ләкин был мөмкин түгел ине шул.

Ә бит күпме атайҙар һуғыш яландарында ятып ҡалды. Тыуған яҡтарына уларҙың даны ғына урап ҡайтты...

Атайым да яҡты донъяны ҡуйҙы. Үҙе иҫән саҡта мин уға арнап шиғыр яҙғайным. Һуғыштан ҡайтып, донъябыҙҙы йәмләп йәшәүсе ветерандарға Еңеү көнө уңайынан әйтелгән мәҙхиә булып яңғыраһын ул.

## Атай мираҫы

***Ауырыйһың...***
***Ләкин шул көйө лә***
***үҙең мине уйлап ятаһың.***
***"Төпсөгөмә мираҫ итеп нимә***
***ҡалдырырға?" –***
***тип баш ватаһың.***



***Тукта әле, атай!***
***Ҡуйсы, зинһар,***
***ҡуйсы шундай юҡ-бар уйҙарың.***
***Үлем көтөп, өйҙә ятҡансы,***
***сыҡ, әйҙә, күр Танып буйҙарын!***
***Күр һин, ана, Борай урмандарын,***
***ауылымдың иркен ҡырҙарын.***
***Ҡайҙа баҡма,***
***тормош ҡайнап тора,***
***ишетерһең хеҙмәт йырҙарын.***
***Хәлең ауыр.***
***Бөгөн генә түгел,***
***тиҫтә йылдар буйы ул шулай.***
***Һуғыш бөткән,***
***ләкин туп тауышы***
***һаман һинең ҡолаҡта шаулай...***
***Яраландың,***
***әммә йығылманың.***
***Үлем хатта һинән ҡурҡты.***
***Душ аҫтында тороп түгел,***
***тәнең***
***пуля ямғырында сыныҡты.***
***Донъя имен, хафаланма, атай.***
***Мираҫ хаҡында һис уйлама.***
***Һин ҡан ҡойоп һаҡлаған***
***был тормош***
***мираҫ түгелме ни улыңа?!***

**Марсель СӘЛИМОВ,**
запастағы майор.

# ТЕРҺӘКТЕ ТЕШЛӘП БУЛМАЙ

Бер көн эшкә килһәм, ҡарауылсы янында таныш булмаған ир менән ҡатын ултыра. Элекке директорыбыҙҙы эҙләйҙәр икән.

Был ир менән ҡатынды эйәртеп, мин белгән адрес буйынса киттек. Үкенескә ҡаршы, беҙгә ишек асыусы булманы.

– Көтөгөҙ, моғайын ҡайтып етерҙәр, – тип ҡайтыу яғына ыңғайланым.

– Беҙ ҙә һеҙҙең менән, – тип тегеләр минең арттан эйәрҙе.

Тышта ҡар ҡатыш ямғыр яуа. Быларҙың өҫ кейемдәре бик йоҡа күренә, аяҡтарында ла йәй кейә торған сандалиҙар.

– Беҙ киткәндә көндәр йылы ине. Оло Теләктән ҡыҙыбыҙҙы ерләп ҡайтып киләбеҙ. Ейәнсураға ҡайтып етергә аҡсабыҙ юҡ, таныштарыбыҙҙан бурысҡа алып торайыҡ тип уйлағайныҡ, – тип һөйләнәләр хәлдәрен. Миңә улар йәл булып китте.

– Таныштарығыҙ ҡайтҡансы, әйҙә, беҙгә барып сәй эсегеҙ һуң, – тип үҙемә алып ҡайттым. Сәй эстеләр, рәхмәттәр әйтеп сығып киттеләр. Ун минуттан кире килеп инделәр ҙә:

– Таныштарыбыҙ һаман ҡайтмаған. Тиҙҙән беҙҙең һуңғы автобус китә. Зинһар, 600 һум биреп тороғоҙ. Ҡайтҡас та ебәрербеҙ, – тиҙәр.

Быларҙың исем-шәрифтәрен, адрестарын, расписка яҙҙырып алып, аҡса биреп сығарып ебәрҙем.

Дүрт айҙан һуң күрһәтелгән адресҡа бурыстарын иҫтәренә төшөрөп, «таныштар»ыма хат яҙҙым. Ләкин «адресат табылманы» тигән яуап ҡына килде...

Бер йәй Сибай яҡтарына юл төштө. Вокзалда автобус көтөп йөрөһәм, ҡалын пальто кейеп алған ир уҙаманы менән бер ҡатын күҙгә ташланды. Мин быларҙы таный ҡуйҙым. Уларға яҡыныраҡ килеп:

– Һаумыһығыҙ, алдаҡсы таныштарым! – тинем.

Ире таныны буғай, башын аҫҡа эйҙе. Ә ҡатыны:

– Беҙ һиңә ниндәй таныш булайыҡ? – тип ҡаршылаша.

– Ҡыҙығыҙҙы ерләп ҡайтып килгәндә, һеҙҙе йәлләп аҡса биреп ебәреүсе ағайығыҙ инде мин. Ул саҡта Ейәнсурала йәшәйбеҙ, тигәйнегеҙ, ниңәлер Сибайҙа йөрөйһөгөҙ. Бурысығыҙҙы ла ҡайтарманығыҙ, шул аҡсаны хәҙер үк миңә бирегеҙ, юғиһә, милицияға алып барам!

Тегеләр, ҡурҡышып, аяғүрә баҫты.

Шул мәлдә эргәбеҙҙән милиционер үтеп бара ине, тегегә хәлде аңлатып, тимер юлы милицияһына алып барышырға һораным. Ул риза булды. Бүлексәлә быларҙы биклэп үк ҡуйҙылар. Протокол төҙөнөләр. Мине ҡабул иткән капитан:

– Был бомждарҙан бурысығыҙҙы ҡайтара алмаҫһығыҙ. Шулай бер нисә тапҡыр хөкөм дә ителгәндәр инде. Тағы урлашып тотолһалар, бөлки, колонияға ебәреп, эшләтеп, шунан ғына һеҙгә булған бурыстарын ебәрербеҙ, – тип минең адресты алып ҡалды.

Бөгөнгә ҡәҙәр уларҙан хәбәр ишетелгәне юҡ. Үтә йомарт булһаң, ошондай хәлдәргә лә эләгәһең икән. Ләкин эш үткәс, терһәкте тешләп булмай шул.

**Мөхәммәт НУРМӨХӘМӘТОВ.**

## Әйтелмәгән әйтемдәр

- **Артыңда көслөләр торһа, өрөргә була.**
- **Ҡыҫҡырышыу әтәстәргә генә килешә.**
- **Кәңәште ялҡауҙан һорамайҙар.**
- **Фантазияһыҙ алдаҡсы тиҙерәк тотола.**
- **Милицияның көсө таяғында түгел.**
- **Аҙыҡ-түлектең хаҡы артҡан һайын, халыҡтың түҙемлеге кәмей.**

**Ғәбит САДИҠОВ.**






С. КАШАПОВА

# Һарыҡтар ғəйепле

(Булған хəл)

Əлфиə ХƏМЗИНА.
Əлшəй районы.



# Сир

(Көрсөк заманы өсөн борсолоп)

**Илгә хаким булып килде**
**Яман бер ир.**
**Ямандарҙың да яманы,**
**Исеме – Сир.**
**Бар белгәне был яуыздың**
**Шул ҡомһоҙ “бир!”**
**Йәнеңде бир!**
**Тәнеңде бир!**
**Ағыҙ ҡан-тир!**
**Тыуһа табип, хаким һаман**
**Башын өҙҙө.**
**Сир килтерҙе бөтә ергә**
**Һағыш-көҙҙө.**
**Фәрештәләр хеҙмәт итә**
**Шайтандарға.**
**Әҙәплегә ҡалды бары**
**Шаҡ ҡатырға.**
**Мөхәббәт юҡ – уны күптән**
**Аҫып ҡуйып,**
**Йөрәктәрҙән мәңгелеккә**
**Йыртып, юйып,**
**Ҡалдырҙылар тик уйнарға**
**“Кети-мети”.**
**“Һөйөү!” – тиһәң кешеләргә,**
**“Аҡса, мә!” – ти.**
**Сабыйҙарға һөт имеҙмәй**
**Хәҙер – әсә.**
**Күкрәктәрҙә һөт юҡ, унда –**
**Һауыт-кәсә.**
**Күңелдәрҙе баҫып килә**
**Мәкер-ялған.**
**Кеше йәнен иблис-аҡса**
**Һатып алған.**
**Кеше түгел тик шәүләләр**
**Осоп бара.**
**Шәүләләрҙең йөҙө ҡара,**
**Уйы ҡара.**
**Шундай сирле йәмғиәттә**
**Эҙләйһең юл –**
**Үҙ-үҙеңә һалырғамы**
**Йә юҡмы ҡул?**
**Һалма! Эҙлә еңеү юлын,**
**Дуҫтар ҡулын.**
**Ҡотҡар йөрәгеңдә бөлгән**
**Ирек ҡолон!**
**Ергә хаким булып килде**
**Һай, яман сир.**
**Уны еңер юҡ микән ни**
**Азамат-ир?!**
**Ғәжәп!..**



А. ВЛАДИМИРОВ



# Һүҙ бутҡаһы

**Яраталар ҡайнатырға һүҙ бутҡаһын,**
**Кемдәр генә был афәттән һуң ҡотҡарһын?**

**Низәр генә һалмағандар бер ҡаҙанға,**
**Тәмле булыр быңдай бутҡа тик наҙанға.**

**Тоҙо ла бар: булмаһын, тип, бутҡа сөсө,**
**Боросо ла: файҙалы, тип, ҡыҙыу көсө.**

**Тәмле-татлы һимеҙ телдәр ҙә һалғандар,**
**Һүҙ бутҡаһын майлап-майлап та алғандар.**

**Ҡайнаталар, һай, тырышып һүҙ бутҡаһын,**
**Әйтерһең дә, һүҙ бутҡаһы – ил тотҡаһы.**



**Был бутҡаны, эй, ярата беҙҙең халыҡ,**
**Бутка ашап, эштәр тора арттa ҡалып.**

**Ниндәй генә сорттары юҡ шул бутҡаның,**
**Һиҙмәйһең дә был батҡаҡҡа һин батҡаның.**

**Көн дә, төн дә ашаталар бер туҡтауһыҙ,**
**Ихлас әйтәм: туйындырҙы һүҙ бутҡағыҙ.**

**Алмас ШАММАСОВ,**
БДУ студенты.





Р. ЮНЫСОВ




**Фәрит ВАХИТОВ.**




**Ю. РӘФҠӘТОВ**

# ДАРЫ ЕҪЕ

Сихри төн. Күк йөҙөндә йондоҙҙар ем-ем күҙ ҡыҫыша. Бындай ҙа айлы төндә һәр кем үҙенсә уй-хыялдар менән ҡаршы ала. Берәүҙәр түҙемһеҙләнеп һөйгәне янына ашыға, икенселәре ҡулына ҡағыҙ-ҡәләм ала. Ә бына Алексей Петров...

Алексей Ауырғазы районының Александровка ауылында буй еткерә. Мәктәптән һуң юғары белем ала. Әлеге көндә Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәһә лә, тыуған районында «Сахан» асыҡ акционерҙар йәмғиәте директоры вазифаһын башҡара.

Уның да ятаҡан шөғөлө бар. Тәбиғәттең матур бер төбәгендә тыуып үҫкәнгәме, ул буш ваҡыттарында урман-ҡырҙар гиҙергә, кейек-ҡоштар менән аралашырға әүәҫ. Алексейҙың тағы яратҡан шөғөлдәренең береһе – һунар итеү. Хатта Башҡортостан Республикаһының балыҡсылар һәм һунарсылар ассоциацияһының өлкән егеры ла ул.

Бер көндө, тирә-яҡ ҡараңғылыҡҡа сорналғас, Алексей урманға юллана. Мылтығын алырға ла онотмай. Кемдән шөрләп торорға? Закунный бит, дүкәмите лә бар. Кем белә, төнгә урманда әллә ниндәй бәлә-ҡазаға тарыуың бар, аҙым һайын эткош тигәндәй, бәләһенән башаяҡ.

Ысынлап та, Алексейҙың күңеле юҡҡа ғына һиҙемләмәгән икән. Урманға инеүе була, ҡаршыһына тарбаҡ мөгөҙлө ат ҙурлығындағы бер ғифрит килеп сыҡмаһынмы? Абау Аллаҡайым! Әжәлем ошондамы икән? Әммә директор һынлы директор юғалып ҡала буламы һуң? Мылтығын ҡулына эләктерә һалып, теге ҡот осҡос нәмәҫтәкәйҙе бер генә сәпәй ҙә ҡуя. Тәкмәсләп барып ята тегеһе...

Шул көндө үк Алексейҙың үҙен дә сәпкә алалар. Суд залында дәғүәләр ҡаты икән.

– Мышыны атыу тыйыла!

Мышы атҡандағы дары еҫе Алексей Петровтың 22 мең 400 һум аҡсаһын да үҙе менән бергә еллэп алып китә.

**В. АЙҘАРОВ.**

# Пенсионер ҙа әҙәм балаһы...

**Бер көн автобуста китеп барһам, туҡталышта пенсионер әбей килеп инде лә, социаль транспорт картаһын кондукторға күрһәтеп, буш урынға барып ултырҙы. Уның артынан кондуктор һөйләнә башламаһынмы:**

**– 200 һумлыҡ билеттарын касса аша ла үткәр, билетын да бир, етмәһә, шулар арҡаһында план тулмай! Ҡасан ғына үлеп бетәләр инде?**

**Теге әбекәй, әллә һаңғырау ине, әллә иҫәр менән булмайым, типмелер, бер ни өндәшмәне.**

**Ә мин өндәшмәй булдыра алмайым. Нимә, ҡарттар хәҙер йәмғиәткә рәхәтләнеп аҡса эшләргә мишәйт итәме ни? Ниңә һуң, улай булғас, кондукторҙарҙы матди ҡыҙыҡһындырыу юлы юҡ, пландарына ла инмәй был хеҙмәтләндереү? Ни тиһәң дә улар билетты ҡарай, хатта аппараты аша ла үткәреп, артыҡ хәрәкәт яһай түгелме?**

**Зинәйҙә ДИНИСЛАМОВА,**
пенсионер.




**– Вәт, сәстерә!**
**– Шуның өсөн саҡырҙыҡ бит...**

– Вот, заливает!
– Для этого и пригласили...

# Эшлекһеҙҙәр

(Скетч)

**Рәдиф ТИМЕРШИН**

*Сәхнәнең бер яғынан ҡәмһеҙ киәфәттә ҡыҫҡа буйлы Ҡушай, икенсе яғынан борсоулы киәфәттә оҙон буйлы Ишәй сыға.*

**Ишәй.** Эштәр хәрт, Ҡушай Ҡуштанбаевич!

**Ҡушай.** Нимә булды?

**Ишәй.** Ҡыҫҡарталар!.. Штатты ҡыҫҡарталар!

**Ҡушай.** Ҡыҫҡартһалар, бик һәйбәт. Унда минең ни эшем бар? Штат ҡыҫҡартыу – минең вазифаға инмәй.

**Ишәй.** Шулайын шулай, әммә беҙҙең бүлектең штатын ҡыҫҡарталар бит!

**Ҡушай** (*тотлоғоп*). Ә-ә-ә!

**Ишәй.** Йәғни, мәҫәлән, йә – һине, йә – мине.

**Ҡушай.** Мин былай ҙа ҡыпҡыҫҡа. Бына һине ҡыҫҡартһындар!

**Ишәй.** Юҡ инде. Шеф: "Үҙегеҙ килешегеҙ. Миңә икегеҙ ҙә йәл", – тине.

**Ҡушай.** Улайһа, былай килешәйек: ҡайһыбыҙ мөһимерәк эш башҡара, шул эшендә тороп ҡала.

**Ишәй.** Мин риза. Әйт, һин ниндәй мөһим эш башҡараһың?

**Ҡушай.** М-м-м-м-м-ин?

**Ишәй.** Һин, һин!

**Ҡушай.** М-м-м-м-ин... Мин... (*Түшәмгә ҡарай, кеҫәләрен актара, иҙәндән нимәләр эҙләй, нимәнелер тибеп ебәргән хәрәкәт яһай.*) Бынауы футбол тубыңды эшкә алып килмәһәң дә була бит инде.

**Ишәй.** Һүҙҙе ситкә борма, һорауға яуап бир!

**Ҡушай.** Ниндәй һорауға?

**Ишәй.** Һин бүлектә ниндәй мөһим эш башҡараһың?

**Ҡушай.** Башта һин әйт.

**Ишәй.** Әйтәм шул. Ауыҙ тултырып әйтерлек эшем бар: һин тәмәке ҡапҡас, шырпы ҡабыҙам!

**Ҡушай.** Ә мин... һин шырпы ҡабыҙғанда тәмәке ҡабып торам! Ҡайһы мөһимерәк – тәмәкеме, шырпымы?

**Ишәй.** Шырпы, әлбиттә! Шырпыһыҙ тәмәке ҡабыҙып буламы ни?

**Ҡушай.** Һин, ҡустым, күҙгә тәмәке төтөнө ебәрмә! Тәмәкең булмаһа, шырпының ни бысағыма кәрәге бар? Тимәк, иң мөһиме – тәмәке! Тимәк, мин мөһимерәк эш башҡарам!

**Ишәй.** Тәмәке төпсөгө тиклем генә көйөңә минең аҡыллы башымды бутама! Иң мөһиме – шырпы! Тимәк, һине ҡыҫҡартырға кәрәк!

**Ҡушай.** Юҡ – һине!

**Ишәй.** Былай мәсьәләне хәл итеп булмай. Әйҙә, шыбаға тотошабыҙ!

**Ҡушай.** Мин риза. Бар, таяҡ алып кил!

**Ишәй.** Ә ниңә – мин? Һин алып кил.

**Ҡушай.** Бар, һин үҙең алып кил!

**Ишәй.** Таптым!

**Ҡушай.** Нимә – таяҡмы?

**Ишәй.** Таяҡты кем алып килеү мәсьәләһен хәл итеү проблемаһына асҡыс таптым!

**Ҡушай.** Һайра!

**Ишәй.** Әйҙә, таяҡты кем алып килергә тейеш икәнлеген асыҡлау өсөн шыбаға тотошайыҡ!

**Ҡушай.** Мин риза. Әммә таяҡты кем алып килергә шыбаға тотошоу өсөн дә таяҡ кәрәк тәһә! Әйҙә, таяҡты кем алып килеү өсөн шыбаға тотошайыҡ.

**Ишәй.** Мин риза. Әммә таяҡты кем алып килеү өсөн шыбаға тотошоу өсөн таяҡты кем алып килеү өсөн шыбаға тотошоу өсөн дә таяҡ кәрәк бит!

**Ҡушай.** Шулай шул. Улайһа, таяҡты кем алып килеү өсөн шыбаға тотошоу өсөн шыбаға тотошайыҡ!

**Ишәй.** Мин риза. Әммә таяҡты...

**Ҡушай.** Кем алып килеү...

*Шеф күренә.*

**Шеф.** Йә, хәл иттегеҙме?

**Ҡушай.** Юҡ. Башта таяҡты...

**Шеф.** Ҡайғырмағыҙ, мин һеҙҙең өсөн хәл иттем инде: икегеҙҙе лә ҡыҫҡартам! Һеҙҙең кеүек эшлекһеҙҙәр кәрәкмәй миңә!

**Ҡушай.** Әйттем бит мин һиңә таяҡ алып кил, тип!

**Ишәй.** Мин дә һиңә шулай тинем бит!

**Ҡушай.** Әйҙә тиҙерәк хеҙмәт биржаһына барып яҙылайыҡ. Унда эшләмәһәң дә аҡса бирәләр, ти.

**Ишәй.** Әйҙә! Как раз беҙҙең өсөн йәтеш урын!

**Ҡушай.** Һиңә лә сират алайыҡмы, шеф?

**Шеф** (*аҙ ғына икеләнеп торғандан һуң*). Алығыҙ, алығыҙ, донъя хәлен белеп булмай, кризис заманы бит.

*Бер-береһен уҙыша-уҙыша йүгереп сығып китәләр.*

*Тамам.*

**Үгеҙ йылы – көрсөк йылы...**
Год быка – год кризиса...



# ОМБ САЙТЫ

**Закир ӘКБӘРОВ**



**Хикәйә**

Сирай Кирәевич был тормошта унды. Уны күтәрҙеләр ҙә күтәрҙеләр. Әллә үҙе әрһеҙ булды, әллә өҫтәге йөнлө ҡулдар тартты – хәҙер инде уныһын асыҡ ҡына итеп кем әйтеп бирһен. Институт бөткәс ауылда эшләне, оҙаҡ та үтмәй район үҙәгенә күсерҙеләр. Унда әллә ни эш күрһәтеп тә өлгөрмәне – ҡалаға алдылар. Был унда ла, күрәһең үҙен таныҡтандыр, юғиһә баш ҡаланың үҙенә үк килтереп ултыртмаҫтар ине. Арбаның бишенсе күсәре итеп кенә түгел – ҙур фирманың генеральныйы итеп!

Ул шулай күтәрелә барҙы, ләкин һис тә танау күтәрмәне, туған-тыумаса, дуҫ-иштәренән йөҙ йәшермәне. Заманында ауылдағы байтаҡ ағай-энеһен район үҙәгенә урынлаштырған ине, сосораҡтарын үҙе менән ҡалаға ла күсерҙе, ә иң ышаныслыларына баш ҡалала үҙе етәкләгән фирмала эш тапты. Ябай ғына түгел, икмәккә май һылап ашарлыҡ төшөмлө эштәр. Бына шулай: үҙе лә күтәрелде, яҡындарын да күтәрҙе. Тағы ла ниндәйерәк бейеклектәргә күтәрелә алыр инеләр икән... хөрмәтлеләрҙән хөрмәтле Сирай Кирәевичыбыҙ көтмәгәндә йән тәслим ҡоламаһа. “Хөрмәтле кеше генә түгел, бөйөк шәхес ине,”– тейеүселәр ҙә булды хатта етәксебеҙҙе һуңғы юлға оҙатҡанда.

Был ҡайғылы ваҡиғанан һуң, хәтһеҙ ваҡыт үтеп китте. Инде бөтәшмәҫтәй тойолған яра ла бөтәшә башлаған ине. Компьютерсыбыҙ, ут күҙ Эрик, яңынан ҡуҙғатып ебәрҙе уны.

– Беләһегеҙме, дядя Фират, где сейчас беҙҙең Сирай Кирәевич? – тине ул ғәҙәтенсә мут йылмайып.

– Ниңә белмәҫкә: баш ҡаланың иң престижный зыяратында, уның иң престижный мөйөшөндә...

– Уныһы – тәне, ә мин йәне тураһында әйтәм.

– Әгәр был, юҡ, теге донъяла йән тигән нәмә бар икән, ожмахталыр, моғайын. Сирай Кирәевич, бар әрүәхтәр алдында көлкөгә ҡалып, тамуҡҡа мәтәлләй торған заттарҙан түгел.

– То-то! Бына әле мин мең бәлә менән ОМБ сайтына керә алдым.

Әйткәс, бер юлы әйтеп китәйек инде: Эрик кеүек компьютерсы, моғайын, донъяла юҡтыр. Компьютерҙы биш бармағындай белә, “Интернет” атлы океанда акулалай йөҙә...

– Ниндәй ОМБ ул тағы?

– Ожмах менән бәйләнеш, дядя Фират! И беләһеңме, унда беҙҙең Сирай Кирәевич тураһында ниндәй информация бар?

Башымды сайҡап, телемде шартлаттым, шулай ҙа “йә-ә” тигән булдым.

– Уны ожмахҡа ҡабул иткәндәр. Унда ла уны ожмахтың ябай гражданины итеп кенә ҡалдырмағандар, быйыл вафат булып, ожмахҡа ҡабул ителгәндәр төркөмөнөң президенты итеп ҡуйғандар.

Түҙмәнем:

– Шапыртһаң да, самаһын белеп шапырт, малай! Ниндәй төркөм, ниндәй президент?! – тинем, ҡысҡырып.

– Ей богу! Валлаһи-биллаһи, дядя Фират! Хлеб тотоп ант итә алам. Бында гендиректор, унда – президент. Бында биш мең кеше менән генә командовать итә ине, унда... Представь себе, йылына Ер шарында ике йөҙ миллион ғына кеше үлде, ти, шуның яртыһы ғына ожмахҡа эләкте, ти... Йөҙ миллион покойников – ҙур бер дәүләт!



Ышаныуын ышанманым, билдәле, хөкүмәт етәксеһе генә булһа, бер хәл. Президент!.. Ә Эрик, минең уйымды уҡығандай, вайымһыҙ ғына һүҙен дауам итте:

– Эйе, әле занимается формированием правительства. Ельцин үҙе эш һорап килгән уға. “По образованию я строитель, төҙөлөш министры итеп ал,”– тигән. Беҙҙең Сирай Кирәевич принципиаль кеше бит ул, “по образованию – строитель, по сути – разрушитель”, тип тегене бүлмәһенән ҡыуып сығарған.

– Шулай уҡмы?! – тинем мин ышанмаһам да, ожмахтағы түрәбеҙҙең тура һүҙлелеге менән һоҡланыуымды йәшерә алмай.

– Вот так! – тине компьютерсы ғорурлыҡ менән. Әйтерһең Ельцинды Сирай Кирәевич түгел, үҙе ҡыуып сығарған. – Дядя Фират! Һиңә был информацияны мин үҙ итеп кенә скачал. Әле Ерҙә берәүҙең дә ОМБ сайтына керә алғаны юҡ! Һин инде башҡаларға – ни-ни! На смех поднимут!

Һөйләмәнем, билдәле: әҙәм ышанмаҫлыҡ хәлде ысын булһа ла һөйләмә, тиҙәр бит. Үҙем дә ышанмаған инем. Тик...

Оҙаҡламай коллективыбыҙҙағы тағы ла өс иптәшебеҙҙең ауырмай-нитмәй бер-бер артлы үлеп китеүе тетрәтте. Фирмабыҙҙың иҡтисад буйынса директоры Турай Кирәевич, бүлек мөдирҙәре Ромул һәм Рем Кирәевичтар. “Көндәш фирманың этлеге, ағыулағандарҙыр, хәҙер бөткәнме ни...”– тиеүселәр табылды. Тик минең күңелемә шик икенсе яҡтан төштө. Етмәһә ут күҙ, Эрик бөгөн коридорҙа ҡабырғама төртөп, күҙен ҡыҫып үтте. Ысынлап микән ни?..










# Дуҫтар күстәнәсе

**“CARICATURA.RU” интернет сайтынан.**






# Йән һөймәгән машина

(Булған хәл)






**Л. САЙРАНОВА.**
Өфө ҡалаһы.

# ✦ Уймаҡ хикәйәләр

Рәшит ФАЗЛЫЕВ

## Белдереү бәләһе

“Өфө” универмагы туҡталышындағы бер бағанаға урыҫ телендә яҙылған “Фатир алмаштырам, тик мин йәшәгән районда булһын”, тигән белдереү йәбештергәндәр. Телефон номеры ла күрһәтелгән. Ныҡлабыраҡ ҡарайһам, номерҙар үҙем менән бергә эшләгән дуҫымдыҡы булып сыҡты. Туҡтале, мин әйтәм, бер аҙ шаяртып алайым үҙен.

Автомат бүлмәһенә инеп, әлеге номерҙарҙы йыйып: “Белдереүегеҙ буйынса шылтыратам,”– тинем. Фатирының нисәнсе ҡатта булыуын да һораштым. Ул да минекен һораны.

– Йөҙ ҙә бишенсе ҡатта, – тип һалдырҙым.

“Йөҙ ҙә бишенсе” тигәнемде “бишенсе” тип аңлаған, күрәһең:

– Бик яҡшы, миңә оҡшай ул этаж. Әллә телефоны ла бармы? – ти был.

– Бар, балконы ла ҙур. Гаражым да, унда баҙым да бар.

– Нисә бүлмәле?

– Бер бүлмәле...

– Ә хаҡын нисегерәк һорайһығыҙ?

– Уныһын инде үҙегеҙ фатирҙы ҡарағас һөйләшербеҙ, килешербеҙ.

– Адресығыҙ?

– Ташкент ҡалаһы, районым...

– Нимә һөйләйһегеҙ? Ниндәй Ташкент, ти ул тағы?!

– Бәй белдереүегеҙҙә “һеҙҙең райондан” тигәнһегеҙ бит! Минең районым Ташкентта. Үҙем әле бында командировкаламын, – тигән булдым саҡ ҡына көлөп ебәрмәйенсә. – Фатирымды барып ҡарағыҙ...

Телефондан:

– Дур-рак! Өфөнән кәрәк миңә!.. – тигән тауыш яңғыраны.

– Ә ниңә улай булғас “Өфөнөң Совет районынан”, тип яҙманығыҙ һуң?! – тинем тегеңә.

Дуҫым тағы ла:

– Юҡҡа башымды ватмағыҙ әле! – тип мығырланы ла трубкаһын ҡуйҙы.

Иртәгеһен эшкә барғас, шул шылтыратыуымды һөйләгәйнем, барыһы ла йылмайып ҡуйҙылар. Тик мин йылмайманым: тартай теленән таба, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Ошо шаянлығым арҡаһында дуҫ менән асыуланыштыҡ. Хәҙер ул минең менән исәнләшмәй ҙә, һөйләшмәй ҙә. Ул иғланын дөрөҫ итеп яҙа белмәгәнгә, әйтерһең, мин ғәйепле.



## Бүләкле ҡунаҡ

Эштән ҡайтышлай, сиратта шаҡтай ғына ваҡыт торғандан һуң, үҙемә оҡшаған импортный бер күлдәк һатып алдым. Тиҙҙән байрам, туған-тыумасаның күҙҙәрен ҡыҙыҡтырып кейермен, – тип уйланым. Тик мин тигәнсә барып сыҡманы – күлдәктән бик тиҙ ҡолаҡ ҡаҡтым. Юҡ, мин уны юғалтманым. Өйгә ҡайтышлай энекәшем янына инеп хәлен белергә уйланым. Хәтер тигәнең тауыҡ хәтере шул. Бөгөн уның тыуған көнө икән. Унда яҡын парҙар йыйналышып килгәндәр ҙә мин килеп инеүгә йырлашып та ултыралар. Бындай саҡта көтөлмәгән ҡунаҡты ла шәп ҡаршылайҙар. Зөфәр ишектән үк ҡысҡырып ҡыршыланы:

– Һуңлабыраҡ йөрөйһөң, ағаҡайым! – тине лә, ҡулымдағы күлдәгемде эргәһенә алып та ҡуйҙы. Үҙенә тип уйланы, әлбиттә. Күлдәкте әйләндергеләп ҡараны ла:

– Рәхмәт бүләгең өсөн, мин яратҡанды алғанһың. Күптән эҙләй инем бындайҙы! – тине.

Табынға ултырттылар. Ҡырлы стаканға һалып “штрафной” ҙа бирҙеләр. Ҡыҫтатмай ғына, эсемдән генә: “Үҙемә кейергә яҙмаған өсөн!” – тип һалғандарын күтәрә һуғып ҡуйҙым. Мәжлес аҙағында, әлдә күлдәк алғанмын, әлдә ҡустыға һуғылғанмын, тигән татлы уй башымдан сыҡманы.




**– Һинең наҙанлығың арҡаһында улыбыҙ икенсе йылға ҡалған!**
– Из-за твоей неграмотности сыночек на второй год остался!

## Эшкә урынлашырға ваҡыт

Мануров ағай ғүмере буйы партия эштәрендә яуаплы вазифалар башҡарҙы. Бер мәл, яҙғы сәсеү ваҡытында, уны «Марс» колхозына вәкил итеп ебәрәләр һәм йәшәп тороу өсөн бер ғаиләгә урынлаштыралар. Йорт хужаһы Мануровты электән үк белгән була. Ул танышын күреүгә ҡыуанып китә.

– Иптәш Мануров, әле һаман эшкә урынлашманыңмы ни? – тип ғәжәпләнә. – Йүнле генә эш табырға ваҡыт инде. Олоғайып та бараһың, пенсияға сығам тиһәң дә, эш стажы ла кәрәк буласаҡ бит әле, – тип өгөт-нәсихәт тә биреп ала.

## Дөрөҫ һөйләмәйһең

Бер малай диктор булып эшләгән атаһына эйәреп, радиотапшырыуҙар комитетына килә. Бына атаһы һауа торошон хәбәр итә:

– Бөгөн көн аяҙ буласаҡ, яуым-төшөм көтөлмәй.

Был ваҡытта тәҙрәнән тышҡа ҡарап торған улы:

– Атай, атай, һин дөрөҫ һөйләмәйһең, – ти. – Ана, ҡара, тышта ямғыр яуып тора бит.

– Балам, мин гәзиткә яҙылғанға ғына ышанам, – тип яуаплай атаһы.

**Мәсғүт ҒИЛМЕТДИНОВ.**
Шаран районы.

## “Сәйфулка – кожаный завод”



Шәрәй ауылында Сәйфулла исемле кеше йәшәй торғайны. Алдашырға, маҡтанырға тигәндә уға ҡуш!

Бер мәл шулай ул Өфөгә резина-техник изделиелар заводында эшләгән танышы янына килеп арзанға, үҙенә резина кәмә һәм хужалыҡта кәрәк булған башҡа әйберҙәр һатып ала. Танышын осратып:

– Мин ауылда тире-тун заводы астым. Һиңә бурыслы булып ҡалғым килмәй, заводтан төрлө кәрәк-яраҡ, сеймал тейәп ебәрермен, – ти ҙә уны ауылға ҡунаҡҡа саҡыра.

Йәйҙең бер көнө машина менән Шәрәйгә танышы килеп төшә. Ул магазин янында йыйылып торған халыҡтан:

– Кожаный завод директоры Сәйфулла Кәримович ҡайҙа йәшәй? – тип һорай.

Кешеләр аптырап:

– Беҙҙә кожаный завод юҡ, Сәйфулла Кәримович тигән кешене лә белмәйбеҙ. Алкаш Сәйпүш бар-барын, әнә, уның өйө һалам башлы, – тип төртөп күрһәтәләр.

Сәйфулла урамда ниҙер эшләп йөрөгән була. Килеп туҡтаған машинаны күрә һалып, тиҙ генә кәртә артынан йылғаға табан ҡасып өлгөрә...

Тик ошо көндән һуң уға “Сәйфулка – кожаный завод” ҡушаматы ғүмерлеккә йәбешеп ҡала.

**Зинәйҙә ДИНИСЛАМОВА.**
Ҡырмыҫҡалы районы.

## Баҫырау Фәрит

Ауыл ере өсөн ҡырҡҡа ярылырҙай ваҡыт – бесән әҙерләү мәле. Бөтә халыҡ – яланда.

Бындай көндә ярҙамға кеше табыуы ауыр. Мин көскә бер дуҫымды осратып, бесәнгә киттек. Әлбиттә, ике кешегә бесән тейәү майлы ҡалъя ашау түгел инде. Иптәшем аҫтан ырғыта, мин өҫтә рәтләп һалып торам. Шулай ҙа тейәп бөттөк бер саҡ. Йөк былай бик матур булды. Әҙерәк ял итеп алдыҡ та баҫырау киҫеп килтереп, тағы йөк башына үрмәләнем. Арҡан менән баҫырауҙы һөйрәп алырға тип арбаның арт ҡырына килһәм, аптырап ҡалдым – ул йөк башына үҙе үк менеп ятҡансы, алға табан һөйрәп алаһы ғына бар. Баҡһаң, көтмәгәндә Фәрит исемле егет килеп сыға ла уны “һә” тигәнсе тейешле урынға күтәреп тә ҡуя, ә иптәшем уның килгәнен абайламай ҡала. Аҙаҡтан мин был турала көлә-көлә иптәштәремә һөйләнем. Бына шунан һуң Фәритте «баҫырау» тип йөрөтә башланылар ҙа инде.

Ҡушаматты булдыҡлы булған өсөн дә тағалар икән шул.

**Миҙхәт ЯХИН.**
Туймазы районы.





М. ҒАФАРОВ


Р. ЮНЫСОВ


А. ЛЕВИТИН

Сөләймән ЛАТИПОВ

Скетч

*Аш-һыу бүлмәһе яғынан музыка ишетелә. Әзалда ир кеше юл кейемендә сумка әҙерләй. Телевизорға барған тапшырыуҙы ишетеп, уға яҡын бара һәм тыңлай башлай.*

**Ир.**

*(Аш-һыу бүлмәһенән ҡатынының башы күренә.)*

**Ҡатын.**

**Ир.**

**Ҡатын.**

**Ир.**

*(Ҡатын инеп китә һәм музыканы туҡтата ла кире килеп сыға.)*

**Ҡатын.**

**Ир** *(телевизорға күрһәтә).*

**Ҡатын.**

**Ир.**

**Ҡатын.**

**Ир.**

**Ҡатын.**

**Ир.**

**Ҡатын.**

**Ир.**

*(Ашығып сумкаһына йәбешә.)*

**Ҡатын.**

**Ир.**

*Ҡатын убә лә сығып китә.*

*Ир ишекте үҙе асып, командировканан ҡайтып инә. Аш-һыу бүлмәһендә шау-шыу: ҡатын-ҡыҙҙар һөйләшеүе һәм көлөүе ишетелә. Ир яйлап ҡына шунда табан атлай. Шул саҡ ҡаршыһына хихылдап көлөп ҡатыны килеп сыға.*

**Ҡатын.**

**Ир.**

**Ҡатыны.**

*(Ирен култыҡлап аш-һыу бүлмәһендә сәй эсеп ултырған ике ҡатын эргәһенә алып сыға.)*

**Ир.**

**Ҡатын.**

*Шатлыҡтарынан йылмайған ҡатындар ҡосаҡтарын йәйеп, кейәүҙәренә табан атлайҙар.*



# Тапҡырҙар
# ТУРНИРЫ



**Белһегеҙ икән, ҡосаҡ-ҡосаҡ хаттар алыуҙың ниндәй күңелле икәнен! Бәйгеселәребеҙҙең һаны көндән-көн артып ҡына ҡалмай, уларҙың оҫталығы ла хайран ҡалдыра. Ҡыҫҡаһы, һүҙ уларға!**

Тәүге яуап Әбйәлил районынан Иҙрис Ноғмановтан килде:

**Кешеләрҙе йөрөтә-йөрөтә**
**туҙып бөттөм,**
**Донъя алмаш килә, тигәндәре**
**хаҡ икән.**
**Түҙем генә ошо көндө**
**оҙаҡ көттөм,**
**Баҡһаң, үҙемде алып йөрөр**
**саҡ еткән!**

Учалы районынан Фәриҙә Ҡәләмова ла ҡалышмай, бер һүрәткә өс шиғыр ижад иткән. Шуларҙың берәүһен генә һайлап алдыҡ:

**Эй, бисара шофёр,**
**машинаңды,**
**Ҡул көсөңә этеп бараһың.**
**Үҙ хәлеңдә үҙең аңламағас,**
**Башыңа сир ниңә алаһың?**

Бәләбәй ҡалаһынан Нәғимә Манзулина һүрәткә ҡарап, бер аҙ хәтирәләргә бирелгән. 1944 йылда Йәрмәкәй районының «Йондоҙ» колхозына утыҙ саҡрым алыҫлыҡтағы «Приют» станцияһынан орлоҡ ташыуҙарын тәфсилләгән ул. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та был хәтирә беҙ тәҡдим иткән һүрәтте күргәс иҫкә төшөүе иғтибарға лайыҡ.

Татарстандың Минзәлә ҡалаһынан Борис Христофоров бәйгенең киләһе турын иғлан итеүҙе көтөп кенә тора, үҙенең ижад емештәрен ебәрә лә башлай. Был юлы ла уның яуабы иғтибарға лайыҡ:

**Тайғаҡ юлға бик бай, тиҙәр,**
**Урал тауын, Өфө яҡтарын.**
**Шул сәфәрҙән ҡайтҡас,**
**күрәһеңме,**
**Таш атымды киләм һөйрәтеп.**

Әбйәлилдән Рәсимә Яхина замана менән бергә атлаусы кеше. Уның яуабы ла үҙенсәлекле:

**Олигархтар башын һалып,**
**Кремлдән һорай аҡса.**
**Оят!.. Ә беҙ бирешмәйбеҙ,**
**Үлмәйбеҙ әле аҫҡа!..**
**Бергәләшеп кризисын да,**
**Иңебеҙгә һалғанбыҙ.**
**Аҡса ла юҡ, бензин да юҡ,**
**Ләкин алға барабыҙ,**
**Ҡыуып етеп ҡарағыҙ!..**

Баймаҡ районынан Көнһылыу Әҙеһәмова ла ошо уҡ теманы һайлаған:

**Юҡ замана килде хәҙер,**
**Булған да бөткән инде.**
**Машинамдың бензины юҡ,**
**Этеп йөрөр көн килде.**

Баймаҡтар бер-беренән уҙҙырырға тырышып, ҡатнаша бәйгелә. Әнә, Фәрит Әбүбәкеров бер ярыштан да ситтә ҡалғаны юҡ:

**Йөрөтә лә белмәгәс,**
**Шундай хәлдә машина.**
**Аяҡ-ҡулға көс төшә,**
**Төшмәҫ тимә башыңа.**

Мәләүез районынан Таһир Күскилдин, шағир һүҙенә оҡшатып:

**Заманалар ауыр,**
**нужалар күп,**
**Аҡса етмәй әле ашыма.**
**Машинамды һатып,**
**туйындым, тип,**
**Тарих яҙайымсы ташына,**– ти.

Ҡыйғынан Илһам Латипов уҡытыусылыҡтан әллә алып-һатыу эшенә күстеме икән?

**Һорайым әле, машина**
**Кемдеке – белмәйһеңме?**
**Арбаһын һаталар, тиҙәр...**
**Алырға килмәйһеңме?** – тип яҙған ул.

Ишембайҙан Р. Мәрғәнов:

**Быға тиклем бер кем әле**
**Былай йөктө ташыманы.**
**Беҙҙең яҡта ғына мөмкин**
**Шулай ташыу машинаны,** – тиһә, Аҫҡын районынан Хәмзә Хафизов был юлы таҡмаҡлап ебәргән:

**Ана килә автомобиль,**
**Беҙҙекеләр түгелме?**
**Ике ҡатлы машинала**
**Елдерәләр түгелме?**

Ошо уҡ стилдә Хәйбулла районынан Фәрит Торомтаев дауам итә:

**Их-ма, машина,**
**Матур килә түгелме?**
**Матур йөрөштәре менән,**
**Эс ҡатыра түгелме?!**

Уға тағы ла күңеллерәк йыр менән Шишмәнән Фәрит Әхмәтов ҡушыла:

**Өс егет йөрөй артымдан,**
**Алам, тиеп, һатам, тиеп,**
**Йүнәтәм, тип, эйәреп.**
**Береһе этеп, береһе тотоп,**
**Береһе куйыр өйләнеп.**
**Әй генәм!..**

**Ошолай таҡмаҡ әйтеп, йырлап-бейеп тамамлайбыҙ был турҙы. Ә бәйге дауам итә, түбәндәге һүрәт тағы ла тапҡыр яуаптар көтә!**



☺☹☺

– Ирең бик холоҡһоҙ, тиҙәр. Ниңә ташлап китмәйһең?

– Уны шатландырғым килмәй.

☺☹☺

– Һин ниндәй тел яратаһың?

– Һыйыр телен.



☺☹☺

– Ҡыҙымды башы-тояғы менән һиңә тапшырам, кейәү.

– Телен үҙеңә алып ҡалһаң да ярай, ҡайным.

☺☹☺

Яңғыҙаҡ бабай яңғыҙаҡ әбейгә:

– Гөлъямал, тиҙерәк өйләнешәйек!

– Ниңә ашығырға?

– Теге донъяла загс юҡ, тиҙәр бит.

Л. РАЯНОВА йыйҙы.

☺☹☺

– Олатай, мин дә пенсионер булғым килә!

– Булырһың, улым, үҫерһең дә, пенсионер булырһың.

– Юҡ инде, мин үҫкәс, банкир булам!

☺☹☺

Кескәй Зифа балалар баҡсаһына фото алып килә. Унда – әсәһе, атаһы, атаһының ҡулында йүргәккә төрөлгән бала.

– Был кем?

– Әсәйем.

– Ә атайыңдың ҡулында кем?

– Мин, йәш саҡта...

☺☹☺

– Доктор, ҡатынымдың тауышы бөттө, берәй нисек ярҙам итә алмаҫһығыҙмы икән?

– Эштән таң атыуға табан ҡайтып ҡарағыҙ...

☺☹☺

– Нишләп аштағы бәрәңгеләрҙең ҡайһылары йомро, ҡайһылары уртаға ярылған? – тип һорай ире ҡатынынан.

– Үҙең, ашты тәрләндерерәк бешер, – тип мыжыйһың бит...



## Туҙға яҙмағандарҙан

*«Которопу сире таралыу сәбәпле, Саҙриевтың эш хаҡын арттырырға».*

(Приказдан).

*«Фермалағы бөтә һауынсыларҙың һөтөн өҫтәгәс, Фәниәнеке күберәк булып күренде».*

(Отчёттан).

*«Һөнәршин цлец сәбәпле, планын цтәй алманы».*

(Аңлатманан).

Я. МИҘХӘТОВ йыйҙы.


## Хөрмәтле дуҫтар!

“Һәнәк”тең киләһе һандарында һеҙҙе тағы ла берегенән-береһе күңеллерәк ижади күстәнәстәр көтә.

Әгәр ҙә һеҙ ярты йылға ғына яҙылған булһағыҙ, подпискағыҙҙы оҙайтырға онотмағыҙ!

**“Һәнәк”кә яҙылыу дауам итә!**






**ҺӘНӘК**
**№ 5 (1200)**

ISSN 0208–094X

“ХЭНЭК” (“ВИЛЫ”)
Ежемесячный журнал сатиры и юмора на башкирском языке.
Издается с сентября 1925 г.

Журналдың ойоштороусыһы:
Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ

**Адрес редакции:** 450079, г. Уфа, ул 50-летия Октября, 13, “Хэнэк” (“Вилы”).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 272-91-02
Баш мөхәррир урынбаҫары 272-52-82
Бүлектәр 272-87-43, 272-52-82

Подписка на журнал принимается без ограничений на всей территории страны.

Беҙҙең сайт: henek.pressarb.ru **Индекс 73456**

Мәҡәләләрҙә килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы.

**Баш мөхәррир Марсель СӘЛИМОВ**

Мөхәрририәт һәм редакция советы:
Александр АНДРЕЕВ (биҙәлеш бүлеге мөхәррире), Венер ИСХАҠОВ (фельетондар бүлеге мөхәррире), Риф МИФТАХОВ (әҙәбиәт бүлеге мөхәррире), Марат ӘМИНЕВ (яуаплы сәркәтип), Рәзилә ЫРЫҪҠУЖИНА (хаттар бүлеге мөхәррире), Хәлил ӘХТӘМОВ (баш мөхәррир урынбаҫары), Артур ВАСИЛОВ, Мансаф ҒИЛӘЖЕВ, Марат КӘРИМОВ, Рәсих ХАННАНОВ, Венера ХӘКИМОВА, Марат ӘБДҮШЕВ.

Сдано в набор 12.04.09. Подписано к печати 13.05.09. Офсетная печать. Усл.-печ.л. 2.Уч.-изд. л. 3,56. Формат 70x100 1/16. Зак.№34. Тираж 3798.

Корректор З. МАЗҺАРОВА

Журнал зарегистрирован в Федеральной службе по надзору в сфере связи и массовых коммуникаций. Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-35759 от 26.03.2009 г.

Цена в розницу свободная.


© “ҺӘНӘК”, 2009

Отпечатано в типографии ГУП “Издательство “БАШКОРТОСТАН”.




**Горизонталь буйынса:** 1. Кавказ ҡулламаһы. 4. Совинформбюро тауышы. 8. Көньяҡ Африкалағы сүл. 9. Алдашмаған көнө һирәк булған кеше. 12. Ҡағыҙ таҫма йәки тау юлы. 16. Билдәле француз королеваһы. 17. Тимер юл бәһлеүәне. 18. Үзбәк яҙыусыһы. 19. Боронғо Греция философы. 20. Самолёт йәки ҡырағай һыйыр. 22. Төп юл. 26. Совет скульпторы. 28. ... Хачатурян. 29. Ватылһа, утынға әйләнә торған тағылма инвентарь. 30. Ҡотоп өйрәге. 33. Иң ағыулы йылан. 36. Социализм заманында түбән баһаланған профессия. 38. 1-се фото. 39. Караптың артҡы өлөшө.

**Вертикаль буйынса:** 2. Табип сирленән һораған нәмә. 3. Күпер аҫтынан осоп үтеп, дан һәм шелтә алған совет лётчигы. 5. Сиркәү округы башлығы. 6. 2-се фото. 7. Капиталының процентары менән тамаҡ туйҙырыусы. 10. Өфөлә сыҡҡан балалар журналы. 11. Украина валютаһы. 12. Яңғыҙ башҡарыусы. 13. XVIII быуаттағы сәнғәт йүнәлеше. 14. Зәһәр еҫле ашлама. 15. Югославия диктаторы. 21. Пират. 23. Чехияла етештерелгән йөк машинаһы. 24. Тропик емеш. 25. Тимерҙең Меделеев таблицаһындағы күршеһе. 27. Нефть ыҫмалаһы. 31. В. Высоцкийҙың шиғырҙар йыйынтығы. 32. Асыҡҡан кеше иң теләп уҡыған яҙыу. 34. Тутыйғош тоҡомо. 35. Стенаға эленгән лампа. 37. Латин Америкаһы революционеры.

**Хәлил ӘХТӘМОВ төҙөнө.**

## 4-се һанда баҫылған кәләсворд яуаптары

**Горизонталь буйынса:** 1. Шукшин. 7. Анималист. 8. Оранжерея. 9. Есть. 10. Пежо. 11. Рококо. 15. Ноябрь. 19. Рента. 20. Иа. 21. Ярд. 22. Сабо. 24. Конка. 25. Гримм. 26. Егор. 27. Ом. 32. Агат. 33. Тарту. 34. Шпак. 36. Тупик. 37. Нар. 38. Ар. 39. Вал. 40. Поп. 42. Ильф. 43. Королёв.

**Вертикаль буйынса:** 1. Шумахер. 2. Наполеон. 3. Византия. 4. Баржа. 5. Ситроен. 6. Стоянов. 12. Ожегов. 13. Оптика. 14. Ара. 16. Орангутан. 17. Биограф. 18. Трюмо. 23. Пиза. 28. Мәхмүтов. 29. Штатив. 30. Триполи. 31. Пушкарь. 35. Каток. 41. По.